ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 сентябрь (нарысай) 2024

№37 (1130)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҡшатланыумы был?**



2-3

**"Геройҙар ваҡыты"**



5

**Әҙләгәненде табыр өсөн...**





нығышмаллыҡ кәрәк

8-9

**Икеләнмәҫкә, тәүәккәлләргә!**



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн баҫмабыҙға 953 һум 58 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*БАШ ҠАЛАМ*

**Өфөлә йәшәүемә күп тә түгел, сит өлкәнән күсеп килеүемә бер нисә йыл. Ләкин ошо ваҡыт эсендә генә лә ҡалала барған үҙгәрештәрҙең бихисап булыуын күреп ҡыуанам: яңы йорттар ҡалҡа, урамдар төҙөкләндерелә, яңы социаль объекттар асыла һәм башҡалар.**

## КҮРКӘМ ЭШТӘР ҠЫУАНДЫРА




Күптән түгел Степан Кувыкин һәм Менделеев урамы киҫешкән урында матур стела барлыҡҡа килде. Унда "Киров районы" һәм "Яратҡан Өфөм" тигән матур яҙыуҙар ҡуйылған. Төнөн матур булып янып торған стела һәм яҙыуҙар, тирә-яғы төҙөкләндерелгән биләмә был урынға тағы ла бер күркәмлек биреп, йәнлелек өҫтәне. Бындай стелалар баш ҡаланың бөтә райондарында ла урынлаштырылһа, ниндәй яҡшы булыр ине.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ХАЛЫҠ ГӘЗИТЕ УЛ!

**Ял көндәрен - шәмбе һәм йәкшәмбене - һәр кем түҙемһеҙләнеп көтөп алалыр, моғайын. Көсөргәнешле эш аҙнаһынан һуң ике көн рәттән өйҙә ғаиләң менән булыу, бәләкәй генә сәйәхәт ҡылыу, туғандарың һәм дуҫтарың менән осрашыу - "бәхет" тигән паздлың бәләкәй генә өлөштәре ул.**

Минең өсөн шәмбене көтөп алырға тағы ла бер сәбәп - ул "Киске Өфө" гәзитенең килеүе. Төшкә ҡарай тараталар почтаны, йәшниктән тиҙ үк алынһа ла, гәзит-журналдар кискә тиклем тейелмәй беҙҙең өйҙә. Ҡайһы берҙә тик район гәзитенә генә күҙ йүгертеп сығыла. Ни өсөн тигәндә, йорт-ихата тирәһендәге барлыҡ эштәрҙе тамамлап, тәмле итеп киске сәйҙе эсеп алғас, шығырлап торған гәзитте ҡулға алып, уңайлы креслоға сумыу үҙе бер кинәнес. Әлбиттә, иң тәүҙә ҡулға "Киске Өфө"нө төшөрөргә тырыша өйҙәге һәр кем. Кем беренсе эләктерә - бәхетле йылмайып, тарих, мәҙәниәт, спорт, эшҡыуарлыҡ, файҙалы кәңәштәр донъяһына сума.

**(Дауамы 3-сө биттә).**

*АФАРИН!*

# МӘҘӘНИ МАЙҘАНҒА СЫҒА...

## Дәүләт ҡурайсылар ансамбле!



**Башҡортостан Башлығы Дәүләт ҡурайсылар ансамбленең тәүге клибы менән уртаҡлашты.**

Унда башҡорт халыҡ көйҙәре "Ҡағы ташы", "Атлы ғәскәр маршы", "Йәнтүрә маршы" көйҙәре һәм башҡорттарҙың боронғо гимны "Урал" яңғырай. "Бер айҙан ансамблдең тәүге концерты була", тип хәбәр итте Радий Хәбиров. Музыканттар октябргә, Республика көнөнә ҙур программа әҙерләй.

- Был коллектив ҙур уңыш һәм танылыу яулар тип ышанам. Алға табан барабыҙ, үткәнебеҙҙе һаҡлайбыҙ, тамырҙарыбыҙҙан айырылмайбыҙ, - тип белдерҙе республика етәксеһе. - Ансамблдең ғүмере сағыу, ҡурай моңондай оҙон булһын! Барығыҙға ла ла матур көн теләйем!

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Радий Хәбировтың указы менән 2024 йылдың 11 мартында Дәүләт ҡурайсылар ансамбле булдырылды.

12+

БАШ ҠАЛАМ



# КҮРКӘМ ЭШТӘР ҠЫУАНДЫРА

(Башы 1-се биттә).

Өфө - спортҡа ҙур иғтибар бирелгән, спорт яратҡан кешеләр йәшәгән ҡала. Мәҫәлән, төрлө йүгереү марафондары, велосипедта йөрөүселәр һәм башҡа спорт саралары үтә, йога менән шөғөлләнгәндәр өсөн Ағиҙел яры буйында, төрлө парктарҙа күнекмәләр ойошторола, скейтбордты үҙ итеүселәр өсөн дә махсус майҙансыҡтар булдырыла һәм башҡалар.

Беҙҙең Өфө замандан артта ҡалмайынса үҫешкән, төрлө йәш ҡатламы өсөн бихисап ял итеү, күңел асыу мөмкинлектәре биргән ҡала. Интернет селтәрендә оҙаҡламай Телеүҙәк янында зиплайн-трасса эшләй башлаясағы тураһында уҡыным. Студенттар һәм туристарҙың күпләп тупланған урыны булараҡ, был уйланылған аҙым, тип билдәләйем.

Мин кино ҡарарға бик яратам. Өфөнөң бөтә кинотеатрҙарында ла булғаным бар, уларҙың һәр береһендә үҙенә генә хас мөхит. Мәҫәлән, "Родина" кинотеатрына әсәйем һәм атайым менән бергәләп йөрөргә яратабыҙ, сөнки "Родина" уларҙың йәшлек йылдарының матур ваҡиғалары шаһиты. Ҙур бер байрамға барған кеүек әҙерләнеп бара улар был кинотеатрға. Ә дуҫтарым менән, башлыса, "Мир" фирмаһындағы йәки "Ирәмәл" сауҙа-күңел асыу комплексындағы кинотеатрҙарға йөрөйбөҙ - ваҡыт үтеү менән нәҡ улар минең өсөн йәшлегем хәтирәләрен ятыр урын буласаҡ.

Ҡала урамдарында йәйәүлеләр өсөн тротуарҙарҙың төҙөкләндерелгән булыуы ҙур әһәмиәткә эйә. Шуға күрә Өфөлә был йәһәттән планлаштырылған эштәрҙең барыһы ла тормошҡа ашырылыуын күреү шатландыра. Ҡала етәкселеге үҙенең социаль селтәрҙәрендә хәбәр итеүенсә, бөгөнгө көнгә 37 тротуар төҙөкләндерелгән һәм уларҙың оҙонлоғо 17 саҡрым тәшкил иткән. Өфөләрҙең генә түгел, ҡала ҡунаҡтарының да уңайлығы өсөн был эштәрҙең файҙаһы баһалап бөткөһөҙ.

Һуңғы йылдарҙа Өфө урамдарында күпләп "йәшел утрауҙар" барлыҡҡа килеүен күреп һөйөнәм. Ошондай матур урындарҙың береһен Рижская һәм Малая Лесозаводская урамдары киҫелешендә, авария хәлендәге йорттар һүтелгән урында эшләйҙәр. "Ҡурай сәскәһе" исемле скверҙа күп функциялы спорт майҙансығы асылды. Был эшкә идара итеү компанияһының да әүҙем ҡушылыуын билдәләп үтергә кәрәк, улар теннис уйнау өҫтәлдәре ҡуйып, урындағы халыҡты ҡыуандырҙы. Шулай уҡ "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһы сиктәрендә скверҙа йүкә, миләш һәм ҡайын ағастары ултыртылып, тирә-яҡты йәмләне. Ошондай күркәм эштәр һаны тағы ла артһын, тигән теләктә ҡалам.

Өфөбөҙ тағы ла үҫһен, матурлығы менән барыһын да һоҡландырып торған ҡала булыуын дауам итһен.

**Илсен САМАРБАЕВ,**
**иҡтисадсы.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# ЯҠШАТЛАНЫУМЫ БЫЛ?



**Ниндәй генә гәзит битен ҡарама йә интернет порталдарын асма - ауыр сир менән яфаланыусы кескәйҙәрҙең ярҙамға өмөт тулы күҙҙәрен күреп, күңел тула; сараһыҙлыҡтан ахыр сиккә еткән ата-әсәләре хәленең бала һыҙланыуҙарынан да ҡатыраҡ булыуын аңлайһың.**

Тәбиғәт ҡанундары тупаҫ боҙолоп, һыу, һауа, тупрағыбыҙ һәм ейгән ризығыбыҙ ыуҙан ғына торған хәтәр заман ҡорбандары улар. Кешелек үҙ-үҙен ағыулауҙан туҡтай алмай - был теманың киләсәге юҡ. Ә бына гонаһыҙ сабыйҙарға ярҙам итергә була! Тик был аҡса мәсьәләһенә килеп терәлә. Күп кәрәк, күңеле ҡатмаған, кеше ҡайғыһын уртаҡлаша белгәндәрҙең тиндәре-һумдары менән генә эш ҡыйратып булмай - үҙ биләмәһе экологияһында тәртип урынлаштыра алмаған, закондарын эшкә ҡуша белмәгән дәүләт бәхетһеҙ балаларҙы ҡанат аҫтына алырға, исмаһам, ошо изгелеге менән булһа ла гонаһын бер аҙ йомшартырға тейештер... Ниһайәт, Рәсәй Президенты Владимир Путин был мәсьәләне ҡуҙғатырға йөрьәт итеп, 2021 йылдың 1 ғинуарынан йыллыҡ килемдәре 5 миллиондан артҡан кешеләрҙән һалым ставкаһы 15 процент итеп түләтелә башланы. Ҡайһы берәүҙәр ҡыуанһа ла, быны прогрессив шкала тип атарға тел әйләнмәне, әлбиттә, сөнки арттырылған ни бары 2 процент - ул хәлле әҙәмдәр өсөн сүп кенә бит! Уның ҡарауы, шул проценттан йыйылған аҡса Президент ҡушыуы буйынса махсус тәғәйенләнеш өсөн федераль ҡаҙнаға тупланып, әлеге ауыр һәм һирәк сиргә тарыған балаларҙы дауалауға, ҡиммәтле дарыуҙар, медтехника, аяҡҡа баҫтырыу саралары һатып алыуға, юғары технологиялы операциялар эшләү өсөн тотоноласаҡ, тип белдерелде. Шул осорҙан алып күпме бала ярҙам алды икән? Владимир Путин указы менән 2021 йылда булдырылған "Изгелек ҡуласаһы" фонды етәксеһе протоиерей Ткаченко әйтеүенсә, 25 мең балаға ярҙам күһәтелгән. Быйыл иһә РФ Хөкүмәте ауыр сирле балаларҙы дауалауға 24,5 млрд аҡса күсерәсәк.

Ярай, был күптән кәрәк булған дәүләт ярҙам сараһы. Ә бына тағы бер көтөп алына алмаған гәзеллек гәмәле - байҙарға уларҙың килеменә ярашлы һалым түләтеү ҡасан бойомға

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...

# ЗЫЯЛЫЛАРҒА ИХТЫЯЖ БАР!



**Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн беҙ, йәмәғәтселек, зыялылар һүҙен көҫәп йәшәйбеҙ. Яҡшылыҡ менән яманлыҡты, әҙәп менән әҙәпһеҙлекте айыра белергә өйрәтеүсе, кешеләр араһында итәғәтле, кеселекле булырға өндәп, ил-халыҡ мәнфәғәте өсөн янып йәшәүҙе хуплаған, милләтенең аңын күтәреү, әхлаҡи тәрбиә биреү, үҫтереү юлын күрһәтеүсе зыялылар һүҙен.**

Шулай тигәндә, тормош мәктәбендә төп вазифаны башҡарыусы аҡыл эйәләре, аң үҫеше буйынса юғары шәхестәр - аҡһаҡалдар, сәсәндәрҙе лә күҙ уңында тотабыҙ, әлбиттә. Быуаттар буйы улар мәғәнәле һәм тәрән йөкмәткеле әйтемдәр, тетрәндергес ҡобайырҙары аша, һүҙ ярҙамында тарҡау халыҡты тупланыуға, бер бөтөн булып ойошоуға өндәгән бит. Тик зыялымын тигән зыялыға, дәрәжәһе буйынса юғарыраҡ күтәрелгәндәргә, ҡобайырҙағыса, "Ил тигәндең кеме юҡ, Кеме юҡ та ние юҡ" тигәнде аңлап, төрлө кимәлдәге халыҡ ҡатламдарын берләшеүгә өндәүсе сәсән йә аҡһаҡал ғына түгел, ә уларҙың именлеген, бөтөнлөгөн тәьмин итер батыр ҙа булыу кәрәк шул.

Халыҡтың тормош-көнкүрешен, уй-теләктәрен сағылдырған, уларҙы берләштерер бер сара булған тел хазинаһы һәм рухи аң кимәле аҡыл эйәләре тарафынан борон-борондан түкмәй-сәсмәй изге аманат итеп тапшырыла килгән. Ошо аманат аша һәр бер быуын атабабаларҙың тормош тәжрибәһен, әхлаҡ нормаларын үҙләштергән. Ә бөгөн, ағы-ҡараны, яманы-яҡшыһы бергә буталған мәғлүмәт ҡойоно заманында, һүҙ ҡәҙеренең һәм рухи байлыҡтың бәҫе ҡалманымы әллә? Әллә кәрәкле һүҙҙе әйтер рухлы шәхестәребеҙ ҡалманымы? Сиселмәҫтәй тойолған мәсьәлә нимәлә һуң? Зыялыларыбыҙ һәм идара итеүсе етәкселәребеҙҙең бер төптән, бер һүҙҙән булыуы, уларҙың халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалыуы, ишетеүе, иҫәпләшеүе кәрәк. Уларҙың халыҡтың аң кимәлен күтәрешер, уны хәстәрләр шәхес булып әүерелеүе кәрәк. Бына ошо фекерем менән уртаҡлашмаҡсы булдым әле...

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация Советын формалаштырыу тәртибе тураһында"ғы федераль законға ярашлы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Лилиә Ғүмәроваға Рәсәй Федерацияһы сенаторы - Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Федерация советында Башҡортостан Республикаһы дәүләт власының башҡарма органы вәкиле вәкәләттәрен биргән указға ҡул ҡуйҙы. Лилиә Салауат ҡыҙы 2014 йылдан - Рәсәй Федерацияһы сенаторы. 2016 - 2019 йылдарҙа - Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары, 2019 йылдан - ошо комитеттың рәйесе.

✓БДБ илдәренең Ижади һәм фәнни интеллигенция форумында ҡатнашыусылар өсөн башҡорт милли кейеменең матурлығын һәм күп төрлөлөгөн сағылдырған этно-дефиле ойошторолдо. Рәсәйҙең һәм донъяның төрлө мөйөштәренән килгән билдәле дизайнерҙар, "Агиҙел" предприятиеһы, "Мәргән уҡсы" ойошмаһы оҫталары һәм башҡалар үҙҙәренең коллекцияһын күрһәтте. Бынан тыш, форум барышында "Торатау" конгресс-холында ҡатнашыусылар өсөн биҙәү-ҡулланма сәнғәте күргәҙмә-йәрминкәһе булды.

✓Президент Владимир Путиндың указы менән Рәсәй Ҡоралы көстәренең штат һаны арттырылды. Хәҙер ул 2 миллион 389 мең 130 кеше тәшкил итә. Улар араһында 1,5 миллион хәрби хеҙмәткәр. Һуңғы тапҡыр штат һаны 2023 йылдың декабрендә арттырылды. Быltыр ул 2 209 130 кеше, шул иҫәптән 1 320 000 хәрби хеҙмәткәр тәшкил итте.

✓Башҡортостан уҙған аҙнала Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм Курск өлкәһендә зыян күреүселәр өсөн сираттағы гуманитар йөк оҙатты. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов белдерҙе. "Курск өлкәһе менән даими бәйләнештә торабыҙ. Курск халҡы йәнә техника һорап мөрәжәғәт итте. Тиҙ арала ебәрергә, уларға ярҙам итергә кәрәк. Беҙҙән унда дүрт ауыр бронялы йөк машинаһы эшләй", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

✓Ҡайһы бер киң мәғлүмәт сараларында республикаға сираттағы ҡош кизеүе янауы хаҡында мәғлүмәт таралды. Иглин районының Тәкәй ауылы хужалыҡтарының береһендә йорт ҡоштары ҡырыла башлаған. Шуға күрә белгестәр урынға барып, һәләк булған ҡош-ҡорттоң биоматериалдарын анализға алған. Тикшереү һөҙөмтәһендә сир раҫланмаған. Башҡортостандың Ветеринария буйынса дәүләт комитетында белдереүҙәренсә, йорт ҡоштары хәүефле вирустан түгел, ә ағыуланып үлгән.

✓ ***Рәсәйҙә ер аҫты ҡаҙыу тармаҡтары менән банк секторында ошоға тиклем күрелмәгән күләмдә килем һәм ғәйәт ҙур дивидендтар түләнеүе яҡшы мәғлүм. Был капитал дәүләт тарафынан файҙаланылмай.***



ашырылыр? Юғиһә бит, хәҙер сирек быуатҡа яҡын инде ярлыһы ла, байы ла килем күләмдәре ер менән күк араһы булыуға ҡарамаҫтан, һалымды бер иш - 13 процент түләп килә һаман. Ғәрлек бит был! Йәнәһе лә, байҙар һәм дә үтә байҙар килеменә прогрессив һалым ҡулланыу уларҙы өркөтөп ҡуйыуы ихтимал да, улары аҡсаларын сит илдәргә тағы ла күберәк сығарасаҡ , имеш. Был һылтауҙың төптө нигеҙһеҙ булыуын бөгөнгө көн бик яҡшы күрһәтте: Көнбайыш был аҡсаларҙы күҙ ҙә йоммай тартып алырға һәләтле! Был хаҡта Владимир Путин байҙарҙы гел иҫкәртә килде: аҡсаларығыҙҙы Ватан иҡтисадына һалығыҙ, был ышаныслыраҡ, юғиһә, сит илдә аҙаҡ капиталығыҙҙы тартып алыуҙары бар, тип. Ә бит граждандарҙың килеме артҡан һайын, улар һалымды ла күберәк түләргә тейеш - был ғәҙеллектең яҙылмаған законы түгелме?

Быйылғы йыл ошо законды аҡҡа ҡара менән яҙып та ҡарарға, тәртип урынлаштырыуға ынтылыш яһалды, ниһайәт: 2025 йылдың 1 ғинуарынан байҙар йыллыҡ килеменән һалымды 15 түгел, ә 22 процент түләйәсәк! Дәүләт Думаһы физик шәхестәрҙең килеменә прогрессив шкала индереү хаҡында ҡабул ителгән законға ярашлы, киләһе йылдан йыллыҡ килем 2,4 миллиондан артмаһа, 13 процент һаҡлана, ә 5 млн килемлеләр - 15, 20 миллиондан - 18, 50 миллиондан - 20 һәм артабанғы юғары килемдән 22 процент һалым түләтеләсәк. Был осраҡта ла әле үтә байҙарға йомшаҡлыҡ күрһәтелә: юғары һалымды улар бөтөн килем иҫәбенән түгел, ә тәғәйенләнгән лимиттан ашып киткән сумманан түләй. Һәм, әлбиттә, 22 процент үтә байҙар өсөн бик түбән һалым. Сағыштырыу өсөн: АҠШ-та иң бай ҡатлам - 39,6, Ҡытай, Бөйөк Британия, Германия һәм Грецияла - 45, Швейцария, Австрия, Бельгияла - 50, Израиль менән Нидерландтарҙа 52 процент түләй һәм улар береһе лә юғары һалым ставкаларынан ҡасырып, аҡсаларын беҙгә килтереп һалғаны юҡ әле.

Әйткәндәй, ватан сәнәғәтенә инвестицияларҙы дәртләндереү маҡсатында тағы бер нисә һалым сараһы булдырырға кәрәк, ти иҡтисад белгестәре. Мәҫәлән, беҙҙә дивидендтарға һалым суммаһы элеккесә 13 процент ҡаласаҡ (2015 йылға тиклем был сумма ни бары 9 процент ҡына ине). Ә бит Рәсәйҙә ер аҫты ҡаҙыу тармаҡтары менән банк секторында ошоға тиклем күрелмәгән күләмдә килем һәм ғәйәт ҙур дивидендтар түләнеүе яҡшы мәғлүм. Етештереү өлкәһен үҫтереүгә бара торған был капитал дәүләт тарафынан файҙаланылмай. Тағы бер аҡса сығанағы - байлыҡҡа һалым да беҙҙә эшләмәй, сөнки Рәсәйҙә үтә ҡиммәтле машиналар ғына байлыҡ иҫәпләнә - был һис аңлашылмай. Ә бит илдә меңдәрсә кв.метр күсемһеҙ милек хужалары, башҡа күп төрлө зиннәт эйәләре бихисап. Өсөнсөнән, эксперттар мираҫ һәм ҡиммәтле бүләк төрҙәренә лә һалым булдырыуҙы кәрәк, тип иҫәпләй. Бөтөн ошо саралар бойомға ашырылған хәлдә Рәсәйҙең аҙ тәьмин ителгән фәҡир ҡатламы, күп балалы ғаиләләр һалым түләүҙән азат ителер ине. Был йәһәттән тағы ла сит илдәр тәжрибәһенә ҡыҙығырға ғына ҡала. Мәҫәлән, Германияла, Австрияла, Бөйөк Британияла, Грецияла, Францияла, Финляндияла, Швейцарияла, Ҡытайҙа ярлылар һалым түләмәй. Шулай итеп, үтә байҙар өсөн тәғәйенләнгән әлеге 22 процентҡа әйләнеп ҡайтҡы килә: ни өсөн бик аҙ? Ә бит байҙар капиталы самаһыҙ, сикһеҙ! Бигерәк иркәләй түгелме уларҙы хөкүмәт һәм дә депутаттар? Ә эш бына нимәлә: Рәсәйҙәге эре капитал сәйәси көскә эйә, тип иҫәпләй эксперттар һәм дәүләткә улар менән һағыраҡ һәм эҙмә-эҙлеклерәк мөғәмәлә итеү кәрәктер, ахырыһы. Улай ғына ла түгел, власть һаман да үтә байҙар алдында яҡшатланыуынан туҡтай алмай, һәм уларҙың күңелен күреү ябай халыҡ иҫәбенә башҡарылыуын дауам итә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАНДАУЫ*

# АҠЫЛҺЫҘ БАШ АЯҠ ТЫНДЫРМАҪ



**Үткән аҙнала донъя хәлдәре Вашингтон менән Лондондың Украина властарына Рәсәй территорияһына алыҫ араға осоусы ракеталар менән һөжүм итергә рөхсәт биреү буйынса осрашыуҙары тирәләй барҙы.**

Бөтөн тип әйтерлек Көнбайыш мәғлүмәт сығанаҡтары һәм йәмәғәтселек иғтибары ошо ваҡиғаға йүнәлтелде, ләкин АҠШ президенты Джо Байден менән Британия премьеры Кир Стармер осрашыуҙары һуңында Украинаға команда биреү хаҡында аныҡ ҡына белдереү яһаманы. Британия премьеры әйтеүенсә, был мәсьәлә буйынса әле ҡарар ҡабул ителмәне, ләкин уға юғарыраҡ кимәлдә - БМО Генераль Ассамблеяһы ултырышында әйләнеп ҡайтыу ихтималлығы бар.

Бындай асыҡтан-асыҡ янауҙарға Рәсәй Президенты Владимир Путин өндәшмәй ҡала алманы, әлбиттә. Көнбайыштың алыҫ араға ҡорал менән Рәсәйгә тоҫҡауын ул, асылда, НАТО илдәренең Рәсәйгә ҡаршы һуғышы тип ҡабул ителәсәген белдерҙе. Украинаның бындай һөжүм яһарға хәленән килмәй, сөнки уны НАТО спутниктары мәғлүмәттәрен файҙаланып ҡына эшләргә була, тине һәм ул осраҡта НАТО үҙенең был хәрби конфликтта туранан-тура ҡатнашыуы хаҡында ҡарар ҡабул итергә тейеш. Шул саҡта беҙ ҙә үҙебеҙгә янаған хәүеф-хәтәрҙән сығып, тейешле ҡарарға киләсәкбеҙ, тип ультиматум белдерҙе Рәсәй башлығы.

Әммә Британия премьеры тынғы тапмай, Рәсәйгә Storm Shadow ракеталары менән һөжүмгә команда буйынса ул 16 сентябрҙә Италия вице-премьеры менән осраша. Мәғлүм булыуынса, Италия хөкүмәте Киевҡа бындай рәхсәт биреүгә бер нисә тапҡыр инде ҡаршы сығыш яһаны. Әйткәндәй, Германия канцлеры Олаф Шольц та был аҡылһыҙлыҡ актына ҡаршы булыуын белдерә: "Башҡа илдәр нисек кенә хәл итһә лә, мин үҙемдең фекерҙә ҡалам. Мин быны эшләргә йыйынмайым, сөнки ул проблемалар тыуҙырасаҡ", - тине ул Die Welt гәзитенә.

Пентагондың элекке хеҙмәткәре Стивен Брайен Weapons and Strategy баҫмаһында сыҡҡан мәҡәләһендә яҙыуынса, "Был аҡылһыҙ һәм дыуамал аҙым. Был АҠШ менән НАТО өсөн бик хәүефле аҙым, ул өсөнсө донъя һуғышына килтерәсәк..."

**Башҡа темаға хәбәрҙәр:**

• Украина Хәрби көстәре Курск өлкәһен ташлап китергә өлгөрмәгән урындағы халыҡ өсөн концентрацион лагерҙар асҡан, ти РФ Эске эштәр министрлығы хеҙмәткәре Родион Мирошник. Ул үҙ докладында Ҡыҙыл тәре штабы менән башҡа шаһиттар күрһәтмәһенә нигеҙләнә.

• Трамптың Уэст-Пали-Бичтағы һайлау алды штабы янында атыш булған, ләкин сәйәсмән зыян күрмәгән. Ваҡиға сәбәпле, тикшереүҙәр алып барыла.Трамптың улы хәбәр итеүенсә, ҡорал ҡулланған шикле кешене тотҡандар.

• Камала Харрис милли һорауҙар һөҙөмтәһендә Трамптан алға сыҡты, ләкин был уға һайлауҙарҙа еңеү тәьмин итә алмай әле.

• Австралия журналисы хәбәр итеүенсә, Украина Ҡораллы көстәре Белгород өлкәһендәге балалар баҡсаһына һөжүм иткән.

• Египеттың Ҡаһирә - Суэц трассаһында Рәсәйҙән 21 турист ултырған автобус етди аварияға осраған. Зыян күреүселәр медицина учреждениеларына килтерелгән. Рәсәйҙәрҙән тыш, автобуста Төркиәнән 11 кеше, Италия һәм Британиянан икешәр турист, Египеттың үҙенән 3 кеше булған.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ХАЛЫҠ ГӘЗИТЕ УЛ!



**(Башы 1-се биттә).**

"Киске Өфө" ысын мәғәнәһендә халыҡ баҫмаһы. Уның биттәрендә республикабыҙҙа йәшәгән һәм эшләгән милләттәштәребеҙ тураһында яҙмалар баҫыла. Ниндәйҙер районның ҡайһылыр ауылында тырышып донъя көткән, күп балалы ғаиләне табып, гәзит журналистары улар менән матур әңгәмәләр эшләй. Шулай уҡ беҙҙең арала йәшәгән һәм эшләгән, иртә таңдан ҡара кискә тиклем юҡты бар итергә тырышҡан, әллә күпме төрлө мәсьәләләрҙең уртаһында ҡайнаған кешеләр - эшҡыуарҙар тураһында ла уҡыуы бик ҡыҙыҡлы. Тиҫтәләгән йылдар эшләгән табиптар менән бер рәттән, яңы ғына уҡып бөтөп, халыҡ һаулығы сафына баҫҡан йәш белгестәр хаҡында ла яҙыуығыҙ ҡыуандыра. "Йылы һүҙ - йән аҙығы", тиҙәр. Ваҡытында әйтелгән йылы һүҙ, күрһәтелгән иғтибар барыһының да индәрен турайтып ебәрә. Ә кешене яҡшы белгес кенә итеп күрһәткән түгел, уның әхлаҡи сифаттарын да асҡан мәҡәләләр айырыуса баһалы.

Гәзиттә шулай уҡ ауыл темаһына, ауыл кешеһенең йәшәйешенә, уй-фекерҙәренә ҙур урын бирелеүе күңелемә яҡын. Тағы ла урман һәм кейектәр донъяһына ҡағылышлы мәҡәләләрҙе лә күрергә теләк ҙур.

Аяғында ныҡ баҫып торған, һәр мәсьәләгә ҡарата үҙенең төплө һәм аныҡ фекере булған, хәл-ваҡиғаларҙы объектив сағылдыра белгән гәзиткә - "Киске Өфө"гә артабан да уңышлы эшмәкәрлек теләйем.

**Радмил АҘНАБАЕВ.**
**Бөрйән районы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Сибай хакимиәте башлығы Азамат Юлдашбаевтың Махсус хәрби операция биләмәһендә хеҙмәт итергә тигән ҡарары хөрмәт уята. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Радий Хәбиров белдерҙе. Билдәләнеүенсә, Юлдашбаев менән бергә Сибай һәм Хәйбулла районының хәрби комиссары Зәбиров Ринат Фәнил улы, Сибай депутаты Аҫылбаев Әхәт Әхмәт улы, "Башмедь" компанияһы водителе Илбуллов Рәмил Мөхәмәтғәли улы ла Махсус операцияға юлланды. Сибай хакимиәте башлығы вазифаһын әлегә ҡала мэрының беренсе урынбаҫары Сергей Озерцов башҡара.

✓Башҡортостан Башлығы бойороғо менән 2024 йылдың 22 августағы "Башҡортостан Республикаһының айырым муниципаль районы биләмәләрендә ғәҙәттән тыш хәл режимын индереү тураһында"ғы 427-се бойороҡҡа үҙгәрештәр индерелде. Үҙгәрештәргә ярашлы, муниципалитет хакимиәттәре ауыл хужалығы предприятиелары етәкселәре менән берлектә республиканың Ауыл хужалығы министрлығына ауыл хужалығы культуралары һәләк булыуы һөҙөмтәһендә күрелгән зыянды ҡаплауға һәм уларҙы үҫтергәнсе тотонолған сығымдарҙы дәлилләгән документтар ебәрергә тейеш.

✓Рәсәйҙә июлдә башланып, августа әүҙемләшә төшкән коронавирус инфекцияһы күҙәтелә. Сентябрҙә уның иң йоғошло штамдары "терелә " башланы, тип хәбәр итә Роспотребнадзор. 10 сентябргә ҡарата Рәсәйҙә ошо сирҙе йоҡторған 25 мең кеше теркәлгән, шуларҙың 3600-ө ҡаты сирләү сәбәпле, дауаханаға һалынған. Аҙна эсендә 34 кеше үлгән.

✓8 сентябрҙә Астанала Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындары башланды. Ярыштар 13 сентябрҙә тамамланды. Турнирҙа илебеҙҙән 209 спортсы ҡатнашты. Башҡортостан делегацияһы һан яғынан икенсе урында, уның составында 26 спортсы. Рәсәй йыйылма командаһының йәмғеһе утыҙ ете миҙалы бар, ун дүртен Башҡортостан спортсылары яуланы. Ғәфүр Рахманғолов (уҡ атыу), Нур Күсәрбаев ("Кок-бору" ҡырғыҙҙарҙың ат уйыны) һәм Илдар Ғирфанов ("Кокпар" ҡаҙаҡ уйыны) бронза миҙалдар яуланы.

✓Башҡортостанда киләһе йылдың уңышы өсөн ужым культураларын сәсеү эштәре бара. 12 сентябргә 161,2 мең гектар майҙан сәселгән, йәғни пландың 43 проценты, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан. Сәсеүлек майҙандарының төп өлөшө ужым бойҙайы өсөн файҙаланыла. Был культураны сәсеү буйынса эштәр экваторға яҡынлаша - 119 мең гектарҙан ашыу сәселгән.

ҠЫҪҠАСА

# ИЛ КИМӘЛЕНДӘ...

**Рәсәй Федерацияһының Мәғариф министрлығы 2024 йылдың 16-21 сентябрендә "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы" конкурсын үткәрә.** Илдең 79 төбәгенән 112 педагог иң яҡшы туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыһы исеме өсөн көрәшә. Конкурсты асыу тантанаһы 16 сентябрҙә Татарстандың баш ҡалаһы Ҡаҙанда уҙҙы. Башҡортостан исеменән был конкурста Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылы урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2024" төбәк-ара конкурсы еңеүсеһе Ибраһимова Азалия Варис ҡыҙы һәм Өфө ҡалаһының 18-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе, "Уҡытыу туған телдә алып барылған мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл педагогы" республика һөнәри конкурсы еңеүсеһе Ишдәүләтова Әлиә Риза ҡыҙы ҡатнаша.

✔ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров балалар баҡсалары тәрбиәселәре өсөн гранттар һанын арттырҙы.** "Башҡортостандың мәктәпкәсә белем биреү программаларын тормошҡа ашырыусы мәғариф ойошмаларында эшләгән йәш уҡытыусыларға Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары тураһында" указға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, йыллыҡ гранттар 50-нән 75-кә тиклем арттырылды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, бер гранттың суммаһы - 575 мең һум. "2024 йылдан башлап йыл һайын 75 йәш тәрбиәсегә Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты тапшырыла. Быйыл 50 грант бирелде, йыл аҙағына тиклем тағы ла 25-ен тапшырыу күҙаллана", - тип белдерҙеләр Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығының матбуғат хеҙмәтендә.

✔ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә төбәктә юл буйы хеҙмәтләндереүен үҫтереү мәсьәләһе тикшерелде.** Республиканың сауҙа һәм хеҙмәттәр министры вазифаһын башҡарыусы Алексей Гусев хәбәр итеүенсә, 2021 йылдан Башҡортостанда Юл буйы хеҙмәтләндереүен үҫтереү концепцияһы тормошҡа ашырыла. Ошо ваҡыт эсендә, 9 миллиард һумдан ашыу инвестиция йәлеп ителеп, 821 яңы объект төҙөлгән һәм 824 комплекс яңыртылған. Юл буйы хеҙмәтләндереүен үҫтереү концепцияһы сиктәрендә республикала "Ер банкы" булдырылған һәм уға потенциаль инвесторҙар өсөн 367 участка индерелгән. Бынан тыш, эшҡыуарҙар инженер һәм транспорт инфраструктураһына сығымдарҙың бер өлөшөн компенсациялауға, шулай уҡ һалым преференцияларына 30 миллион һумға тиклем субсидия юллай ала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ФӘН ӘҺЕЛДӘРЕ ЙЫЙЫНЫ

**БДБ илдәренең мәҙәни хеҙмәттәшлек форумы баш ҡалабыҙ Өфөлә ойошторолоуы - Башҡортостан өсөн оло мәртәбә. Өфөлә уҙ эшен башлаған Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең XVII ижади һәм фәнни интеллигенцияһы форумының пленар ултырышында Радий Хәбиров ошо хаҡта белдерҙе.**

"Был - мәҙәниәттәрҙең бер-береһен байытыуға арналған гуманитар форум. Форумға килгән Беларусь, Әзербайжан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Төркмәнстан делегацияларын ихлас сәләмләйем. Беҙҙе һәр ваҡыт дөйөм мәҙәни киңлек һәм уртаҡ тарих берләштерә. Беҙ ҡаҙаҡ дуҫтарыбыҙға, коллегаларыбыҙға "Алтын кешенең донъя музейҙары буйлап йөрөүе" экспозицияһын беҙҙә лә күрһәтеүҙәрен һорап мөрәжәғәт иткәс, ҡаҙаҡ коллегаларыбыҙ хупланы. Ә беҙ уларға үҙебеҙҙең театр менән барҙыҡ. Үзбәкстанда булған саҡта беҙҙе Ташкенттың Еңеү паркына алып барҙылар. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда 800 меңдән ашыу бала Үзбәкстанда һыйыныу урыны тапҡан. Бер бала ла балалар йортона ебәрелмәгән. Был беҙҙең һоҡланғыс тарихыбыҙ. Ҡырғыҙстан хаҡында һөйләгәндә, миңә "Ожмах әсәйҙәрҙең аяғы аҫтында" тигән фильмды ҡарарға тәҡдим иттеләр. Үҙенсәлекле фильм. Быны бөтә донъя кинематографияһы шедевры тип иҫәпләйем.

Яңыраҡ тәүге башҡорт нефте асылыуға 90 йыл тулыуҙы билдәләнек. Был мәсьәләлә Баҡы нефтселәре фәнни, технологик ярҙам күрһәтте. Әзербайжан эшҡыуарҙары Ишембайҙағы эшҡыуар егеттәр менән бергә башҡорт нефтен асыусыларға һәйкәл ҡуйҙы. Был да беҙҙең тарих. Төркмәнстан менән хеҙмәттәшлек булдырыуыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Беҙ Күсмә цивилизациялар музейын төҙөйбөҙ, һеҙҙең уның менән танышыу мөмкинлеге булыр. Төркмәнстан мәҙәниәтенә лайыҡлы иғтибар бүләбеҙ. Беҙҙә, ысынлап та, ҙур һәм берҙәм мәҙәни киңлек бар. Һеҙҙе тағы ла бер тапҡыр Башҡортостанда сәләмләйем. Башҡортостанға рәхим итегеҙ!" - тине Радий Хәбиров.

# БЫЛ - ИЗГЕ МӨХИТ

**Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренең XVII ижади һәм фәнни интеллигенцияһы форумында РФ Президентының халыҡ-ара мәҙәни хеҙмәттәшлек буйынса махсус вәкиле Михаил Швыдкой һәм БДБ дәүләттәренең гуманитар хеҙмәттәшлек буйынса Дәүләт-ара фонды идараһы рәйесе, Әзербайжандың Рәсәйҙәге Тулы хоҡуҡлы илсеһе Полад Бюль-Бюль улы ҡатнашты. Форумдың пленар ултырышынан һуң улар журналистарҙың һорауҙарына яуап бирел, шулай тине:**

- Форум бик ентекле, хас башҡорттарса ҡунаҡсыллыҡ менән ойошторолған һәм шул уҡ ваҡытта беҙҙең форумдың бөтөн тәртиптәре һаҡлана: панель дискуссиялар, тимәк, ирекле фекер алышырға, тәҡдимдәр менән уртаҡлашырға мөмкинлек бар, - тип һөйләне Полад Бюль-Бюль улы. - Шуға күрә мин Фонд идараһы исеменән иң тәүҙә республика етәксеһенә, мәҙәниәт министрлығына, министрға һәм ойоштороу комитетына ҙур рәхмәт белдергем килә. Мин беләм, шул һандағы кешене ҡабул итеү һәм, иң мөһиме, форум ҡатнашсыларына ҡыҙыҡлы булһын өсөн тейешле контент тәьмин итеү - ул ҙур эш. Былдай форумдар ойоштороу бик ҙур әһәмиәткә эйә. Ул мәҙәниәт, сәнғәт кешеләренә, ғалимдарға бер-береһе менән аралашырға мөмкинлек бирә.

Үҙегеҙ беләһегеҙ, бөгөн бөтөн донъяла бик ябайҙан булмаған шарттар, хатта, мәсьәлән, билеттар һәм ҡунаҡханаларҙың ҡиммәтләнеүе, таможня, ил сиген үтеү йәһәтенән һәм башҡа аралашыу ҡыйынлыҡтары тыуҙырылған осор бит. Шуның өсөн дә былдай сараларҙың ҡиммәте тағы ла нығыраҡ күтәрелә, сөнки ул ижади кешеләргә аралашырға мөмкинлек бирә. Минеңсә, бөгөн был бик мөһим.



Күптәр бында әле генә Санкт-Петербургта булып үткән берләшкән мәҙәниәттәр форумынан килде. Унда 80-дән ашыу ил ҡатнашты, ә инде халыҡ-ара ойошмаларҙы ла ҡушһаң, йөҙгә тула. Мәҙәниәттә һәм, ғөмүмән, донъяла тормошта ябайҙан булмаған осорҙа бер-берең менән фекер алышыу бик кәрәк. Проблемалар бик күп һәм улар хаҡында һөйләшергә кәрәк. Санкт-Петербург форумында ла һәм шуның дауамы булараҡ ҡабул ителеүсе беҙҙең был форумда ла күтәрелә ул проблемалар, сөнки БДБ илдәре вәкилдәре форумында айырым бер мөхит - минең быуын кешеләре, бер илдә тыуып үҫкән кешеләр йыйылған. Беҙгә шуның өсөн дә аңлашыуы еңелерәк, әлбиттә. Ләкин яңы шарттарҙа яңы быуын - интернет быуыны үҫә, һәм улар өсөн бер ниндәй ҙә йәшерен серҙәр юҡ. Тап шуның өсөн дә күҙмә-күҙ осрашып аралашыуҙар кәрәк беҙгә. Был үҙендә күрһәтеү, башҡаларҙы танып-белеү ул...

**Журналистар менән осрашыуында Михаил Швыдкой Башҡортостандың феномены хаҡында белдерҙе:**

- Рәсәйҙә мәҙәни, ҡеүәтле, көслө, сағыу үҙәктәр бар, әммә беҙ был юлы Башҡортостанға хеҙмәттәшлек иткән илдәрҙән коллегаларыбыҙҙы алып килергә теләнек. Башҡортостан - борон-борондан, быуаттар буйына, һуңғы 400-450 йылда, төрлө этнос халыҡтары бергә йәшәгән урын. Был йәһәттән Башҡортостан Волга буйында, Урал тауҙарында һәм башҡа төбәктәрҙә йәшәгән славяндарҙың, төркиҙәрҙең, ерле этностарҙың яҡынлығы һәм берҙәм йәшәүе феноменын сағылдыра. Был төрлө этностар берләшкән һәм бөтөнләй изге күңелле, толерантлы мөхит. Беҙгә коллегаларыбыҙға, бигерәк тә бөгөн, мигранттар мәсьәләһе киҫкен торғанда, сиктәрҙең нисек үҙгәреүен, мәҙәниәттәр ҡаршы ҡуйылғанда Рәсәйҙә, Башҡортостанда был проблеманың юҡлығын күрһәтеү бик мөһим ине.

Башҡортостанда халыҡ-ара аралашыуҙа проблемалар юҡ һәм, минеңсә, беҙ бик дөрөҫ һайланыҡ. Өфө - бик ҡеүәтле, мәҙәни, белем биреү, фәнни үҙәк. Бында университеттар, мәҙәниәт учреждениелары, филармония, театрҙар бар. Мәҙәни һәм башҡа учреждениелар тығыҙ бәйләнештә эшләй, уларҙа йәштәр күп. Һеҙҙә белем биреү системаһы яҡшы, унда төрлө илдәрҙән граждандар килеп уҡый. Башҡортостанда урыҫ теле проблемалары менән етди шөғөлләнеүҙәре аңлашыла. Башҡортостан сит илдәрҙә лә, атап әйткәндә, Тажикстанда урыҫ телен өйрәнеүҙә күҙәтеүгә алған. Был матур ерҙе һәм был матур ҡаланы күрһәтеү теләгенең сәбәптәре күп. Минеңсә, беҙ бик дөрөҫ һайланыҡ, - тип билдәләне Михаил Швыдкой.

**Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН**
**яҙып алды.**

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔ Рәсәй Тәфтиш комитетының Өфө гарнизоны буйынса хәрби тәфтиш бүлеге тәфтишселәре йәнә республиканың баш ҡалаһында иҫкәртеү рейдтары үткәрҙе. Улар гражданлыҡ алған сит ил граждандарын уларҙың эш урындарында тикшерҙе. "Йәмғеһе 105 граждандың шәхесе һәм илебеҙҙә йәшәргә хоҡуғы булыу-булмауы тикшерелде. Быға тиклем Рәсәй Федерацияһы гражданлығын алған дүрт граждан хәрби иҫәпкә ҡуйыу өсөн хәрби комиссариатҡа ебәрелде", - тип хәбәр иттеләр ведомствонан. Башҡа мигранттарға иһә Рәсәй гражданлығын алған осраҡта йәшәгән урын буйынса хәрби иҫәпкә торорға кәрәклеген аңлаттылар.

✔ Рәсәйҙә эксперттар алтынға мансылған ағастар араһында йөрөргә, фотоға төшөргә һәм какао эсергә мөмкин булған ун паркты һайлаған. Иң күркәмдәре иҫәбендә Өфөнөң Иван Якутов исемендәге мәҙәниәт һәм ял паркы ла бар, тиелә Туту сәйәхәттәр сервисы мәғлүмәттәрендә. Ҡала Советының беренсе рәйесе хөрмәтенә аталған Иван Якутов исемендәге парк - балалы ғаиләләрҙең һәм ғашиҡтарҙың яратҡан урыны. Күл буйында йөрөргә, эскәмйәгә ултырып ял итергә, ҡоштарҙы ашатырға мөмкин. Бынан тыш, паркта балалар тимер юлы эшләй.

✔ 3 октябрҙән Өфөнөң Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең Шарджа ҡалаһына авиарейстар башлана. Рейстар аҙнаһына биш тапҡыр: дүшәмбе, шишәмбе, кесаҙна, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә башҡарыла. Маршрутка 174 пассажирға иҫәпләнгән Airbus A320 самолеттары сыға. Өфөнән самолет урындағы ваҡыт буйынса төнгө 2-се 30 минутта һауаға күтәрелә. Шарджа аэропортына тиклем 4 сәғәт 45 минут ваҡыт китә, тип хәбәр иттеләр Өфө аэропортынан.

✔ Өфөнөң Киров районы суды 18 сентябрҙә мутлашыуҙа ғәйепләнгән ирҙе 2 айға һаҡ аҫтына алыу тураһында ҡарар сығарҙы. Судтың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ул иптәше менән зыян күреүсенең 1 миллион һум аҡсаһын үҙләштерергә теләгән. "Мутлашыусылар ханымға туғанының Украина ҡоралды көстәренә әсирлеккә төшөүе тураһында ялған мәғлүмәт еткергән һәм уны азат итеү өсөн ярҙам күрһәтергә вәғәҙәләгән", - тип белдерҙеләр судта.

✔ Рәсәйҙә Финанс министрлығы спиртлы эсемлектәргә минималь хаҡты билдәләне. Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы хәбәр итеүенсә, 2024 йылдың 1 июленән коньяк, бренди, араҡы һәм ликёр-араҡы изделиеларына яңы хаҡтар раҫланды. Хаҡты индексациялау инфляция кимәле, 9 градустан юғарыраҡ булған алкоголгә акциз ставкаһының күтәрелеүе һәм алкоголле продукцияны етештереүгә сығымдарҙың артыуы менән бәйле.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✔ *"Был мәктәптәрҙә беҙ Башҡортостандың киләсәген тәрбиәләйбеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Унда уҡыған балалар бер нисә телдә, шул иҫәптән туған башҡорт, татар телдәрендә һөйләшә".*



# БАЙМАҠТА ЛА...

**Башҡортостанда полилингваль мәктәптәр селтәре үҫешә, тип яҙа республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. "Яңы уҡыу йылында Баймаҡ районында туғыҙынсы белем усағын астыҡ", - тип билдерҙе ул.**

Әлеге көндә Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Нефтекамала, Сибайҙа, Учалыла, Мишкә һәм Хәйбулла райондарында полилингваль мәктәптәр уңышлы эшләп килә. Әбйәлил районының Асҡар ауылында ла балалар баҡсаһы менән берләштерелгән мәктәп төҙөйҙәр. Киләсәктә Бишбүләк районының Бишбүләк һәм Тәтешле районының Яңы Тәтешле ауылдарында ошондай мәктәптәр һалыу планлаштырыла. Әле унда полилингваль кластар асылған. "Был мәктәптәрҙә беҙ Башҡортостандың киләсәген тәрбиәләйбеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Унда уҡыған балалар бер нисә телдә, шул иҫәптән туған башҡорт, татар, республикабыҙҙа йәшәгән башҡа халыҡтарҙың телдәрендә һөйләшә".

Республика етәксеһе билдәләүенсә, бындай мәктәптәрҙә уҡыу программаһы, спорт әҙерлеге көслө, яҡшы матди база бар, һәләтле уҡытыусылар эшләй. "Беренсе полилингваль мәктәптәрҙе 2019 йылда астыҡ. Уҡыусыларҙың һөҙөмтәләре был тәжрибәнең бик уңышлы булыуы хаҡында һөйләй. Ошо эште дауам итәбеҙ. Башҡортостанда полилингваль белем биреүҙе үҫтереү программаһы 2030 йылға тиклем иҫәпләнгән", - тип йомғаҡ яһаны Радий Хәбиров.

# "ГЕРОЙҘАР ВАҠЫТЫ"

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Геройҙар ваҡыты" программаһында ҡатнашыусы Оскар Ситдиҡов менән осрашты.**



Башҡортостанда тыуып үҫкән Оскар Ситдиҡов 2022 йылдың 24 февраленән 2024 йылдың 25 майына тиклем Махсус хәрби операция бурысын башҡарған. 2024 йылдың июленән ул "Геройҙар ваҡыты" Президент кадрҙар программаһында ҡатнаша. Хәрби хеҙмәткәр Башҡортостан Башлығы Хакимиәтендә стажировка үтә. "Геройҙар ваҡыты" программаһы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар - илебеҙҙең яңы элитаһы араһынан етәкселәр әҙерләргә ярҙам итә, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Ватанды һаҡлаған кешеләр, заманса идара итеү технологияларын өйрәнә һәм үҙ иленә тыныс урында хеҙмәт итә, уны яҡшыраҡ итергә ярҙамлаша. Идара итеү эше күнекмәләренән тыш, "Геройҙар ваҡыты" программаһы команда эшенә өйрәтеүҙе һәм һәр яҡлап шәхси үҫеште күҙ уңында тота. Оскар Ситдиҡов республика Башлығына дәүләт граждандыҡ хеҙмәте системаһына инеү һәм төбәк менән идара итеү процесын эске яҡтан күреү мөмкинлеге өсөн рәхмәт белдерҙе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2024 йылдың 29 июлендә аҙналыҡ оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Оскар Ситдиҡовты хәрби бурысын үтәгәндә күрһәткән батырлығы өсөн генерал Шаймуратов ордены менән бүләкләне.

# ӘЙҘӘГЕҘ, ГЕОПАРКТАРҒА!

**Башҡортостанда "Янғантау" һәм "Торатау" геопарктарын үҫтереүгә республика бюджетынан 600 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә төбәктең эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры вазифаһын башҡарыусы Зөһрә Гордиенко хәбәр итте.**



Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: "Янғантау" геопаркы Рәсәйҙә һәм элекке Советтар Союзы илдәре биләмәһендә беренсе булып ЮНЕСКО-ның глобаль геопарктар селтәренә инде. 2021 йылда был статусҡа дәғүәселәр исемлегенә "Торатау" геопаркы ла өҫтәлде. "ЮНЕСКО эксперттарының иҫкәрмәләренә ярашлы, Ғафури, Ишембай һәм Стәрлетамаҡ райондары сиктәрендә "Торатау" геопаркы биләмәһенә үҙгәрештәр индерелде һәм расланды, - тип асыҡланы Зөһрә Гордиенко. - 2025 йылдың майына тиклем беҙ халыҡ-ара ойошмаға тейешле документтар ебәрәсәкбеҙ, ә беҙҙең ғаризаны 2025 йылдың сентябрендә ҡарарға планлаштыралар".

Билдәләнеүенсә, 2024 йылда ике геопарк та 600 меңдән ашыу туристы ҡабул иткән. Янғантауҙа визит-үҙәк, Рәсәйҙәге беренсе туристик коворкинг, дүрт ял базаһы, шул иҫәптән ике тирмә эко-отеле эшләй, шулай уҡ "Салауат ере" тарихи-мәҙәни комплексы һәм федераль әһәмиәттәге археология ҡомартҡыһы булған Иҙрис мәмерйәһе халыҡта ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. "Торатау" ҡунаҡтары өсөн ике визит-үҙәк, алты тирмәле этнокомплекс һәм Торатау шиханына хәүефһеҙ экологик һуҡмаҡ булдырылған.

Башҡортостан Башлығы геопарктар буйынса республика Попечителлек советының сираттағы ултырышын үткәрергә ҡушты. Унда биләмәләрҙе үҫтереүҙең перспективалы йүнәлештәрен, шул иҫәптән яңы объекттар төҙөү һәм асыу мәсьәләләрен дә, ҡарарға кәрәк.

ҠЫҪҠАСА

# УРАМДАР ТӨҘӨКЛӨГӨ...

**Хәбәр ителеүенсә, Өфө ҡалаһының Пугачев урамын реконструкциялауҙы тамамлау эше киләһе йылға күсерелгән. Пугачев урамын реконструкциялауҙың беренсе этабында Дуҫлыҡ Монументынан Геофизиктар урамына тиклем эштәр планлаштырылған булған.** Тик ике күсемһеҙ милек объектын күсереп булмау сәбәпле, Пугачев урамын реконструкциялауҙың икенсе этабын тамамлау һуҙыласаҡ, ул 2025 йылда башҡарыласаҡ, тип аңлаттылар Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Шул уҡ ваҡытта Генерал Рыленко һәм Пугачёв урамдары сатындағы сиселеш финал стадияһына сыҡты. Объекттың әҙерлеге 80 процент, төҙөлөштө IV кварталда тамамлау күҙаллана. Әммә сентябрь аҙағында уҡ бында бер нисә әҙер юл һыҙатын файҙаланыуға тапшырырға тейештәр, тип белдерҙеләр. Юл сиселеше тәүлегенә 48-50 меңләп автомобиль үткәрә аласаҡ. Ике кимәлле, алты һыҙатлы юл сиселеше Генерал Рыленко урамын яңыртып төҙәлөүсе Пугачёв һәм Бородино урамдары менән тоташтырасаҡ.

✔ **Баш ҡалала "Өфө муйынсағы" тип аталған экоһуҡмаҡты төҙөкләндереү дауам итә. Ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев ошо проекттың бер участкаһындағы эштәр барышы менән танышты.** Ошо ҙур проекттың Совет районына ҡараған был өлөшө - "Кариҙел һуҡмағы" тип атала. "Аврора мәрйене" "Аҡбуҙат һуҡмағы" менән тоташтырыласағы хаҡында иҫегеҙгә төшөрәм. Эштәрҙең темпы һәйбәт, әммә уларҙы тиҙләтергә кәрәк. Бында ҡатмарлы рельеф, төрлө үҙенсәлектәр ҙә күп. Урында мөһим моменттар буйынса фекер алыштыҡ. Алға барасаҡбыҙ", - тип яҙҙы социаль селтәрҙәрендә ҡала башлығы. Уның әйтеүенсә, барса эштәр тамамланғас, "Президент-отель" ҡунаҡханаһының тирә-яҡты күҙәтеү майҙансығынан Лихачев бөгәлөнә тиклем 16 саҡрымлыҡ арауыҡта уңайлы ял итеү һуҡмағы хасил буласаҡ.

✔ **Ошо көндәрҙә Өфөләге Балалар китапханаларының үҙәкләштерелгән системаһы йыл һайын ойошторған "Йәй һәм китап" балалар ҡала конкурсына йомғаҡ яһаны.** Быйыл ижади ярыш "Йәйҙең 30 бите" тип исемләнде һәм баш ҡалабыҙҙың 450 йыллығына, Ғаилә йылына арналды. Еңеүселәрҙе тәбрикләрҙән алда кинотеатр фойеһында билдәле Өфө авторҙары Светлана Войтюк, Ирина Исмәғилева, Алена Кайбышева, Гөлшат Абдеева менән аралашыу һәм автографтар алыу мөмкин булды. Ҡунаҡтарҙы Бесәй Базилио, Төлкө Алиса, Мэрри Поппинс ҡаршы алып торҙо, кеше буйлыҡ "китаптар" балаларҙы квест уйындарында ҡатнашырға саҡырҙы. Робот техникаһы һәм оҫталыҡ дәрестәре, фотоға төшөү урындары эшләне. Тантаналы сара барышында балалар һәм уларҙың ата-әсәләре конкурс биттәренә күҙ һалды, уңыштарын барланы һәм еңеүселәрҙе тәбрикләне. Уларға саҡырылған ҡунаҡтар ҡотлау һүҙҙәрен еткереп, изге теләктәрен теләне.

✔ **Өфөлә Фехтование үҙәген төҙөү график буйынса бара. Ошо хаҡта Башҡортостандың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте.** Әлеге ваҡытта буласаҡ Фехтование үҙәге бинаһында эске яҡтан эшкәртеү-биҙәү эштәре башҡарыла, ямғыр һыуҙары һәм көнкүреш канализацияһы монтажлана, шулай уҡ яҡынтирәләге территория төҙөкләндерелә. Фехтование үҙәген асыу ошо йылдың октябрендә күҙаллана. "Рәсәйҙең фехтование федерацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, махсуслаштырылған фехтование йыйһаздары әҙер һәм улар Мәскәү келәттәрендә һаҡлана. Спорт залдары әҙер була барыу менән йыйһаздар Башҡортостанға ҡайтарыласаҡ", - тип белдерҙе Руслан Хәбибов. Башҡортостандың Фехтование үҙәге Өфө ҡалаһының 450 йыллығына әҙерлек барышында төҙөлгән иң ҙур өс спорт объекттарының береһе буласаҡ, тип билдергәйне элегерәк БР Башлығы Радий Хәбиров. Ошо заманса спорт объектын сафҡа индереү быйылғы йылдың көҙөндә Өфөлә үтәсәк "Рәсәй - спорт державаһы" тигән халыҡ-ара форум алдынан ҙур ҡаҙаныш итеп баһаланасаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Андыҙ

Андыҙ (девясил высокий) 2,5 метрға етерлек дарыу үләне. Тамыры йыуан була, июль-август айҙарында һары сәскә ата, орлоҡлана. Тамырҙарында 44 процентҡа тиклем инулин, 1-4 процент эфир майы, сапонинлар, лайла, алколоидтар бар. Андыҙҙың тамырын ҡара көҙҙә ҡаҙып алалар, әммә ҡырауҙар төшкәнгә тиклем өлгөрөргә кәрәк. Тамырҙарын таҙартып сайырға һәм тиҙ генә киптерергә кәрәк. Тамырҙы ҡабығынан әрсергә кәрәкмәй, сөнки ул биологик әүҙем матдәләргә бай. Аппетитты һәм аш һеңдереүҙе яҡшырта, бөйәл ҡыуҙырғыс, ҡаҡырыҡты сығарыу, тирләтеү, елһенеүгә ҡаршы, тынысландырыусы көскә эйә.

❖ Бронхиттан 1 ҡалаҡ андыҙ тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп 15 минут ҡайнатырға, һыуытып һөҙөргә. Төнәтмәне 3 сәғәт һайын йылы көйөнсә сирек стакан эсергә.

Шулай уҡ бронхиттан 2 балғалаҡ ваҡланған андыҙ тамырына 3 стакан ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойоп, 8 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда сирек стакан эсергә.

Тағы ла 1:1 нисбәтендә андыҙ һуты һәм балды ҡушып, ҡаты йүгәлләгәндә ашарға була.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә гөлбаҙран (пижма обыкновенная) сәскәһе һәм ваҡланған андыҙ тамырын тигеҙ өлөштә алырға. Әҙерләмәнең 1 балғалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1,5 минут парҙа тоторға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 2 сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ Атеросклероздан 20 грамм киптереп ваҡланған андыҙ тамырын ҡара быялалы шешәгә һалырға, өҫтөнә 1/2 стакан спирт ҡойорға, ҡараңғы урында 20 көн төнәтергә. Шунан һөҙөргә, прополистың 20 проценттлы спирт төнәтмәһе менән яртылаш ҡатыштырырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр 25-30 тамсы эсергә.

❖ Талсыҡҡанда андыҙҙың тамырһабағын онтарға, көнөнә 3 тапҡыр 1 грамм онтаҡты йотоп, артынан һыу эсергә. Ашарҙан алда ҡабул итергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Һыу тауығы, тәтелдәгес



Кәүҙәһе барҡылдаҡ һымаҡ ҙурлыҡта. Тартай һымаҡтарҙан уны оҙон, ҡыҙыл, саҡ ҡына аҫҡараҡ бөгөлөп торған суҡышы айырып тора. Осошо бик һүлпән, тартай кеүек тәпәйҙәрен аҫҡа һәләндереп оса. Ҡанаттарының өҫкө яғы арҡаһы кеүек үк йәшкелт һоро төҫтә. Ҡорһағының өҫкө яғы, боғағы, башының сикә өлөшө ҡорос төҫөндә. Ҡорһағы һәм ҡабырғалары буй-буй аҡлы-ҡаралы һыҙыҡтар менән сыбарланған. Йәш ҡоштарҙың төҫө оло ҡоштоҡо кеүек сағыу түгел, суҡыштары - һары. Йәйелгән ҡойо ҡанатының киңлеге - 38-45 см.

Оя ҡорған саҡта сусҡа балаһы кеүек тауыш сығара. Тауышын йә нәҙегәйтеп, йә ҡалынайтып "уиит, уиит" тип ҡысҡыра, уға ҡырҡа ғына "дзюк" тип тә өҫтәй. Эңерҙә һәм төнөн генә тауышлана.

Европа менән Азияның далалы өлөштәрендә киң таралған. Элек Өфө өйәҙендә лә (1897 й.) оя ҡорған. Ағиҙелдең Ырғыҙлы ауылы эргәһенән аҡҡан ерендә лә тәтелдәгес осраған. Учалы районының Өргөн күлендә бер нисә тапҡыр был "сусҡа һыҙғырыуы"н ишетергә насип булды. Тәтелдәгес оя ҡорған ер мул һыулы, батҡаҡлы, ҡуйы үләнле булырға тейеш. Парланышып оя ҡоралар, үҙҙәренең ерен һаҡлап талашҡан осраҡтар ҙа булғылай.

Ояны ата ҡош ҡора, уның сите-башы үлән менән ҡапланған була. Инә ҡош 7-10 (һирәгерәк 6-13) йомортҡа һала, 19-22 көндә бәпкәләр сыға ла башлай. Уларҙың мамығы ҡара, тәпәйҙәре һәм суҡыштары ҡыҙыл була. Бәпкәләргә 25 көн тулғас, ғаилә "тарҡала". Йәш ҡоштар иһә ике айҙан ҡанат нығыта.

Бөжәктәр, үрмәкселәр, селәүсендәр, моллюскылар, ҡайһы берҙә тәлмәрйен, ваҡ балыҡ, ваҡ ҡоштарҙың йомортҡаһы һәм бәпкәләре менән туҡлана. Рациондарының ҙур өлөшөн һаҙлыкта үҫкән үҫемлектәрҙең орлоҡтары алып тора.

Йылы яҡҡа августа уҡ юллана, был мәлдә тупҡа тупланмайҙар. Төнөн генә оса.

Каспий һәм Ҡара диңгеҙҙең ярҙарында, шулай уҡ Көньяҡ Азияла ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Һәр кешене фани донъяға әсәһе тыуҙыра, һәм һәр бәпес тәүге көндәренән үк кешеләр йәшәгән мөхиткә яраҡлаша башлай, быны психологтар социаль адаптация тип атай. Баланың тәүге "социаль етәксеһе", донъя менән аралашсыһы - уның әсәһе. Бик тиҙҙән әсә туҡландырыусынан баланы кеше булараҡ формалаштырыусыға әйләнә. Бала менән әсә бәйләнеше, биологик ихтыяждарҙан башланып, тора-бара социаль-психологик төҫ ала. Был бәйләнеш шул тиклем ныҡ һәм көслө, ул күп йылдар буйына һаҡланып ҡала. Хатта ки оло йәштәге кеше лә әсәһенең үлемен бик ауыр кисерә, үҙен етем ҡалғандай итеп тоя. Әлбиттә, ғаиләнең башҡа ағзалары ла - атай кеше, баланың өлкәнерәк туғандары, олатаһы-өләсәһе лә уның шәхси мөхитен формалаштырыуҙа ҡатнаша, һәм улар шәхескә иң яҡын бәләкәй генә айырым һәм үҙаллы социумды тәшкил итә.**

# ЯҢҒЫҘЛЫҠ ФӘЛСӘФӘҺЕ



Фани донъяға килгән мәленән баҡыйлыҡҡа күскәнсәгә әҙәм балаһының иң көслө һәм башҡа бер нәмә менән дә алыштырғыһыҙ ихтыяжы - һәр даим кешеләр менән аралаша алыу. Социаль мөхит кешене кеше итә. Күренекле философ Карл Маркс кешенең тик башҡа кешеләр, тотош йәмғиәт йоғонтоһонда ғына шәхескә - социаль кешегә әүерелеүен билдәләй: "... кеше тәүҙә икенсе кешегә көҙгөгә ҡараған кеүек ҡарай". Икенсе бер кешенең башҡаларға социаль көҙгө була алыуы - метафорик, әммә ысынбарлыҡты сағылдырыусы образ. Һәҙәмтәлә әҙәми затҡа башҡа кешеләрҙән бөтөнләйгә ситләшеп, бер кем менән дә бәйләнеше булмаған кеше рәүешендә йәшәү мөмкин түгел.

Бына ошондай фәлсәфәүи һығымталарҙан һуң тормошобоҙҙоң бер ғәмәли проблемаһына күсһәк тә була. Ул - яңғыҙлыҡ мәсьәләһе. Уны нисек итеп аңларға һәм аңлатырға була? Ғөмүмән, йәҙәрләгән, хатта меңәрләгән башҡа шәхестәр араһында йәшәгән кешенең яңғыҙлыҡҡа дусар булыуы мөмкинме?

Психологтар теле менән әйткәндә, яңғыҙлыҡ - шәхестең билдәле бер шарттарҙа үҙен йәмғиәттән ситкә тибелгән, һис бер кемгә лә кәрәге булмаған кеше сифатында ҡабул итеүе һәм кисереүе. Бының сәбәптәре күп төрлө. Яңғыҙлыҡ тойғоһоноң тәү сәбәптәре - баланың үҙ ғаиләһендә ҡағылып-һуғылып, рәнйетелеп үҫеүе. Әгәр ғаиләлә тупаҫлыҡ хөкөм һөрһә, атаәсә мөхәббәтһеҙ йәшәһә, уларҙың ғаилә ағзаларына ҡарата изге тойғолары үтә наҡыҫ булып, балаларҙы ҡаты тотоп, башлыса ҡурҡытып, ҡул тейҙереп үҫтерә икән, бәләкәйҙән үк сабыйҙар күңелендә кәмһенеү комплексы хасил була. Бындай балалар йыш ҡына үҙ-үҙенә бикләнә, үҙҙәрен ҡырыҫ һәм агрессив тота, ихлас аралашыуға бармай.

Бер саҡ урта йәштәргә еткән бер ауылдашым менән уның ғаиләһе тураһында һөйләшеп киткәйнек. Был ир ауылда үҙен тупаҫыраҡ тотто, яҡын дуҫтары булманы, алама ҡылыҡтары ла булып торҙо, хатта бер яҡын ғына туғанын хас дошманылай күрҙе. Әйтергә кәрәк, ул бик шуҡ, үҙ һүҙле, тыңлашмаусан малай була, шуның арҡаһында ата-инәһенән йыш ҡына туҡмала. Бына ошо ирҙең бер әйткән һүҙе лә иҫемдә: "Эйе, мин үҙемде бәләкәйҙән үк хулигандарса тоттом. Инәйем сыбыҡ менән дә һыҙыра, ҡайыш менән дә аҡырып илағансы яра ине. Йоҙроҡ ла уғата ҡаты булды. Туҡмалып үҫтем. Яланға ҡасып китеп, үкһеп-үкһеп илаған көндәрем аҙ булманы. Шул саҡта уйлай торған инем, мине инәйем үҙе тапмағандыр, юғиһә, шул тиклем йәберләмәҫ, язаламаҫ ине, тип". Был осраҡта ни әйтәһең: был кеше бала сағынан үҙ ғаиләһендә үҙен ситкә тибелгән, кәмһетелгән итеп тойоп, сабый күңеле менән яңғыҙлыҡта үҫкән.

Бер яңғыҙы ғына ғүмер һөргән кеше һәр даим яңғыҙлыҡ тойғоһон кисерәме икән? Яңғыҙ йәшәүселәр йәмғиәтебеҙҙә аҙ түгел. Әммә уларҙың күбеһе йәмғиәттә үҙҙәрен иркен тота, башҡалар менән ихлас аралаша, туған-тыумасаларын, дуҫтарын ташламай, төрлө йәмәғәт эштәре менән маһыға, башҡаларға файҙалы ғәмәлдәр ҡыла. Тормошобоҙ шулайыраҡ: ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ир-аттан оҙағыраҡ йәшәй, күп кенә апай-әбейҙәребеҙ бер яңғыҙы ғүмер һөрә, әммә улар, башлыса, ауыр яңғыҙлыҡ хисенән азат була. Уларҙың күбеһе ошондай көн итмешкә өйрәнеп китеп, хатта бик иплe, итәғәтле, унған яңғыҙаҡ бабайҙар менән бергәләшеп йәшәүҙән баш тарта.

Бай тормош тәжрибәһе туплап, башҡа кешеләрҙең яҡшы ҡараштарын, ихтирамын тойоп йәшәү, үҙ-үҙең, ҡылған эш-ғәмәлдәрең менән ҡәнәғәт булыу әҙәм балаһын яңғыҙлыҡ тойғоһонан ҡотҡара. Был да йәмәғәт феномены: яңғыҙлыҡ асылы яңғыҙ ҡалыуҙа түгел, ул тышҡы күренештән бигерәк үтә ауыр һәм ҡатмарлы эске тойғо. Яңғыҙлыҡ - негатив хис-тойғоларҙан хасил була, был сифат кешенең үҙенән тора.

Әммә шуны ла белдереү артыҡ булмаҫ: үҙ ғүмерендә аҙмы-күпме яңғыҙлыҡ хисен тоймаған кеше юҡтыр ул. Быға миҫалдарҙы күп килтерергә була. Мәҫәлән, яуапһыҙ мөхәббәт кисергән егет йә иһә ҡыҙ үҙен кәмһенә башлай, егеттәр йә ҡыҙҙар яратырлыҡ матурлығы юҡтыр, тип үрһәләнә, хатта депрессияға бирелә. Йыш ҡына яҡын кешенде юғалтыу шундай уҡ ауыр, негатив хистәргә сәбәпсе була, һәм ошондай хис-кисерештәр оҙайлы дауам иткән хәлдә кеше үҙен япа-яңғыҙ ҡалғандай тоя башлай. Ғөмүмән, йәшенә, енесенә, биләгән дәрәжәһенә ҡарамаҫтан, бер кем дә яңғыҙлыҡ менән бәйле депрессиянан азат түгел. Психологтар ҡарамағына, ошондай оҙайлы негатив хис-кисерештәр арҡаһында ҡайһы бер кешеләрҙә суицидаль ниәттәр барлыҡҡа килеүе мөмкин. Бындай халәттең бигерәк тә үҫмерлек дәүерендә хәүефле булыуын оноторға ярамай. Яңғыҙлыҡ тойғоһона бирелеп, үҙ-үҙенә бикләнгән кешеләргә ваҡытында психологик ярҙам итеү кәрәк. Бында бер принцип мотлаҡ үтәлергә тейеш: "Яңғыҙ кешене яңғыҙ ҡалдырмағыҙ!" Кеше хәленә инә алыу, уның күңелен табыу, ауыр уй-хистәренән арындырыу, ниндәйҙер бер матур ғәмәлдәр, маҡсаттар менән албырғата, мауыҡтыра алыу - яңғыҙлыҡта ҡалған кеше өсөн иң ябай һәм һөҙөмтәле сара ул.

Йәнә бер фекер. Йәшәйештә шундай мәлдәр була, ҡайҙалыр урманҡырҙарға, сәхрәләргә сығып китеп, бер яңғыҙың ғына ҡалаһы килә. Тап шундай мәлдәрҙә кеше үҙенең ҡылған ғәмәлдәре, яҡындары, дуҫтары хаҡында нығлап уйлана, башҡалар менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен анализлай, бер үҙе генә ҡалғанда хасил була торған тәрәнтен хистәр кисерә. Әйтергә кәрәк, сәнғәт әһелдәре, шағирҙар, яҙыусылар, улар йәмғиәттә нисек кенә билдәле шәхестәр булмаһын, үҙҙәренең иң аҫыл ижад емештәрен яңғыҙ ҡалып, башҡа бер кем дә ҡамасауламағанда хасил итә.

Бер яңғыҙын ҡалмаҫ өсөн аҙмыкүпме яңғыҙ була белергә лә кәрәктер. Яңғыҙлыҡ хисен кисермәгән кешенең яңғыҙлыҡтан интеккән кеше хәлен аңлай алмауы ла бар бит. Шулай итеп, яңғыҙлыҡ феноменының кире һәм ыңғай яҡтары булыуын иғтибарға алыу фарыҙ. Ошо хаҡта уйланыуҙарымды халыҡ шағиры Раиул Бикбайҙың "Йөҙ ҙә бер хәзис" исемле китабынан алынған шиғри вәғәз менән тамалау урынлы булыр:

*"Яман менән ултырғансы*
*Бер яңғыҙың ҡалған яҡшы.*
*Гел яңғыҙың көн күргәнсе*
*Һәйбәт ҡорҙа булған яҡшы".*

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

✓ *Щеглов тураһында һөйләгәнендә атайым уның үҙе өсөн атай кеүек, а башҡаларға ҡарата эттән дә яманыраҡ булыуын әйтер булды: мәҫәлән, ул башҡорттарға кешелекһеҙ рәүештә яза биргән.*



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**П.К. Эссен**

**(1817 - 1830 йылдарҙа губернатор булған).**

Бәйән ителгәндәрҙән тыш, Ырымбур губернаһына йәнәш булған күрше Пермь губернаһының тау заводтарында йәшеренеп ятҡан каторжандар һәм Себер ҡасҡындары талау һәм юлбаҫарлыҡ ҡыла, ә бындағы заводтарҙың халҡы һәм уларҙың хужалары раскольниктар булды.

Хәрби губернатор Эссенға иң юғары ғали йәнәптәренән ошо заводтарҙы күҙәтеү аҫтында тотоу хаҡында бойороҡ бирелде, һәм батша Пермдең шәхси милектәге заводтарында килгән сағында уларҙың хужалары һәм идарасылары, каторжандарҙы йәшерә алмағас, уларын тере көйөнсә домна мейестәренә ташлауҙары хаҡында һөйләнеләр. Домнанан металл ғына сыға, ә кешеләрҙән ниндәй ҙә булһа эҙ ҡалмай.

12-се йыл алдынан сит илдә йәшәүсе заводчик Демидов, Наполеондың ниәттәрен белеп ҡалып, ул уңышҡа өлгәшкән хәлдә Рәсәйҙә крепостной хоҡуҡты юҡ итергә теләүен аңғарып, үҙенең Ҡыштым заводтарын бер нисә мең крәҫтиәндәре һәм 700 мең дисәтинә ере менән сауҙагәр, раскольник Расторгуевҡа 500 мең һум ассигнацияға һатып ебәрә, уныһы бик ҙур имение хужаһына әйләнеп, был мөлкәт әлегә тиклем уның варисҭары ҡулында ҡала.

Генерал Эссен, Александр батша йүнәлешендәге башланғыстарҙы, Павел ғали йәнәптәре талаптарына тура килтереп, ғәмәлгә ашырырға тырыша. Ул тейешлесә ҡәтғилек менән хәрби частә заманса кимәлгә күтәрергә теләй. Башҡорттар һәм барса казактар ябай кейемдә йөрөй ине, форма булманы. Эссен уны индерергә тырышты. Формалы кейем буйынса уның Ырымбур ғәскәренә ҡуйылған талаптары бигерәк тә ҡәтғи булды. Форштадта йәшәгән казактар, ысынында хеҙмәттә булыусылар иҫәбендә һаналып, ҡаҙна довольствиеһында торҙо, ә офицерҙарҙың жалованьеһы бик тә түбән ине: хәҙерге аҡса менән йылына хорунжий 17 һум, йөҙ башы (сотник) 22 һум, есаул 28 һум ғына аҡса алды.

Эссен офицерҙарҙы үҙ эштәре буйынса йөрөгәндә лә формала булыуҙарын талап итте, был талап көлкөлө хәлгә тиклем еткергән мәлдәр булды. Бер офицер, һарыҡ түшкәһен һатып алып, уны үҙе алып килгән сағында Эссенға тап була. Уға тейешле баһа биреү фарыз. Офицер фронтка тора, бер ҡулы козырек аҫтында булһа, икенсеһе менән һарыҡ түшкәһен тотоп тора, уныһы ла генералға честь биреп торғандай тойола. Ошо осраҡтан һуң формала булыу талабы йомшара төшә.

Эссен ваҡытында Ырымбур төбәге ғәскәрҙәренән айырым Ырымбур корпусы төҙөлә һәм ул корпус командиры званиеһында йөрөй. Уға көн һайын пехотанан ординарецтар һәм казактарҙан атлы офицерҙар, урядник йә иһә унтер-офицер һәм ике рядовой ебәрелә, Эссен ҡайҙа булһа ла һыбай сыҡҡанында атлылар менән бергә йөрөй.

Ул губернатор булғанда типтәрҙәрҙән ике атлы полк һәм атлы артиллериялы казак бригадаһы булдырыла, уларҙың командирҙары һәм офицерҙарҙың күпселеге урындағы помещиктарҙан йә иһә регуляр офицерҙарҙан тора.

Бригада командиры булараҡ, типтәр полктары менән махсус бурыстар чиновнигы, полковник Щеглов командалыҡ итә; ул Ырымбур казактарынан, башҡорттарҙан һәм Ставрополь ҡалмыҡтарынан торған йәйге кордон һаҡсылары начальнигы ла була.

Часть командирҙары фураждан һәм түбәнге чиндарға тәғәйенләнгән хәрби кейем-һалымдан ҙур килем ала, ә Щеглов йә аҡса түләгән башҡорттарҙы срогынан алда өйҙәренә ҡайтарып ебәрә, йә уларҙың бер өлөшө ҡалала тотола һәм Бердянск-Куралин линияһында күренеп ҡала, ундағыларҙы ҡаҙна иҫәбенә йәшәтеү ҡаралған; һуңғыһы ысынлап та шунда тотолған, күп булмаған хәрбиҙәргә бирелә, ә башҡаларына тейешле аҡса Щеглов кеҫәһендә ҡала.

Йәй көндәрендә был заттар Маяҡ тауындағы лагерҙа типтереп йәшәй, унда йыш ҡына Эссен үҙенең свитаһы менән барып йөрөй. Йыр, музыка, шарап йылғалай аға, кистәрен өҫтәлдәргә тәмленән-тәмле аштар ҡуйыла. Бигерәк тә шәп йәшәй һәм һыйлай белеүселәрҙән 1-се типтәр полкы командиры, полковник Окуневты һәм полковник Щегловты атарға була. Уларҙың икеһендә лә минең атайым хеҙмәт итә һәм ул саҡта булған хәл-ваҡиғаларҙы йыш иҫенә төшөрә ине: Щеглов тураһында һөйләгәндә һәр саҡта ла уның үҙе өсөн атай кеүек, а башҡаларға ҡарата эттән дә яманыраҡ булыуын әйтер булды: башҡорттарға кешелекһеҙ рәүештә яза биргән; әгәр улар йыраҡтан уҡ Щегловтың лагерға килеүен күреп ҡалһа, шундуҡ төшөнкөлөккә бирелә, сөнки уларҙың бик һирәге язаһыҙ ҡала. Бындай шарттарҙа уға 25 йә иһә 50 һум түләп (хәтеремдә яҡшы һаҡланмаған), өйҙәренә ҡайтып китергә теләүселәр аҙ булмай. Лагерҙа йәйге бараҡтар төҙөү өсөн аҡсаны һис йәшермәй алалар; әлбиттә, аҡсаның бер өлөшө тәғәйенсә ҡулланыла, әммә күп өлөшө полковник кеҫәһендә ҡала.

Бындай эш боҙоуҙар хаҡында Петербургҡа ла шикәйәт яҙыла. Ырымбурға флигель-адъютант Игнатьев килеп китә, ул һуңынан Петербургтың генерал-губернаторы итеп тәғәйенләнә, һәм Эссен Петербургҡа хәрби губернатор итеп ебәрелгәнгә тиклем эштәр нисек булған, шулай ҡала бирә.

Ул идаралыҡ иткән саҡта Ырымбурҙа сәйәси маҡсатта йәшерен ойошма барлыҡҡа килә; ул Петербург ойошмаһының бүлексәһе итеп һанала, уны диңгеҙ офицеры Завалишин төҙөй һәм етәкләй, ул үҙе Ырымбурға һөргөнгә ебәрелгән була. Завалишин ошондай йәмғиәтте нигеҙләү, һуңынан уны начальствоға ошаҡлау аша үҙен аҡларға һәм элекке хәләтен ҡайтарырға ниәт ҡора. Тап шулай килеп сыға ла. Йәш линия батальонданан һәм сәйәси эштәрҙә бер ни ҙә аңламаған казак офицерҙарынан торған түңәрәк хасил була, протоколдар яҙыла һәм былар, бер ниҙе лә аңламаған, иҫерек көйҙәренә үҙ имзаларын ҡуя, шунан эш барлыҡҡа килә.

Йәмғиәт етәксеһе Завалишин, яҡшы белемле һәм яҡшы ғаиләнән сыҡҡан кеше булараҡ, Эссен тарафынан ошо ойошманы асыусы һәм ғәйепләү өсөн кәрәкле фактарҙы табыусы итеп батшаға күрһәтелә, әммә бынан бер ни ҙә килеп сыҡмай; тәфтиш ваҡытында кемдең етәксе икәнлеге асыла. Юғары суд ҡарары менән Завалишиндың үҙен каторга эштәренә хөкөм итәләр, пехота офицеры Колесниковты һәм башҡаларҙы Себергә һөрәләр, ә ике казак офицерын, берәһе Ветошников, йәш булыуҙарын һәм ни өсөн имза ҡуйғандарын аңламауҙарын, ғәйептәрен ихлас таныуҙарын иҫәпкә алып, офицер званиеларынан төшөрөп, пехота полктарына һалдат хеҙмәтенә ебәрәләр.

Завалишин бер нисә йылдан һуң ғәфү ителә һәм Иркутск ҡалаһында йәшәй. Беҙҙең көнсығыш флотилияһына хеҙмәткә саҡырылған моряктар, Завалишинды күреп, уға баш эйеүҙе үҙҙәренең бурысы итеп ҡарай, бының өсөн дөрөҫ фекер йөрөтөүсе кешеләр уларҙы битәрләй. Был ваҡиға булған саҡта йәшәгән кешеләр йәмғиәттең ҡағыҙҙары арыһында башҡорт кантон начальниктарына, армия хеҙмәтенә алыныуҙарына һылтанып, Ырымбурға бер нисә ҡораллы полк килтерергә тейеш булыуҙары хаҡында күрһәтмә булыуы хаҡында һөйләй, бында Эссендың алдаҡ имзаһы бик һәйбәт итеп ҡуйылған була. Полктар Ырымбурға килеү менән хөкүмәткә ҡаршы бунт күтәреү һәм үҙҙәренең начальниктарын ҡырып бөтөрөү күҙаллана.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

Был ваҡытта 58-се гвардия атлы полкы менән гвардия подполковнигы Павел Пахаревский командалыҡ итә, ул тәжрибәле һәм ҡыйыу офицерҙарҙың береһе була.1943 йылда, Фрунзе исемендәге Хәрби Академияның тиҙләтелгән курстарын тамамлағас, ул 7-се гвардия атлы корпусы штабында оператив бүлек начальнигы ярҙамсыһы вазифаһында хеҙмәт итә, 1944 йылдың яҙында 58-се гвардия атлы полкы командиры итеп тәғәйенләнә, Польшаны азат итеү яуҙарында хәрби сыныҡыу үтә. Браллентин өсөн алышта иҫ китмәле ҡаһарманлыҡ һәм рух ныҡлығын күрһәтә. Алыштың иң хәүефле мәлдәрендә ул үҙе, подразделениелары позицияларында булған көйө, оборона һуғышы менән оҫта идара итә, яугирҙарыа көс-ҡеүәт биреп тора, полк артиллерияһы һәм полкҡа бирелгән өҫтәмә батареялар уты ярҙамында дошмандың һәр атакаһын кире ҡағыуға өлгәшә.

Браллентин янында 148-се артминполктың 1-се батареяһы, артиллерия утын мәргәндәрсә ҡулланып, немецтарҙың бронетехникаһын ҡырып һала. Уның командиры, гвардия капитаны Нагаев Мөгин Кәрим улы дошман танкылары һәм үҙ йөрөшлө штурм орудиелары батарея позицияларына яҡынлашҡас ҡына ут асырға бойора. Ҙур тиҙлектә килгән немец танкылары Браллентиндың көньяҡ ҡырыйына яҡынлаша башлағас, ул көслө тауышы менән команда бирә: "Дошман танкыларына тура тоҫҡап ут асырға!" Шул саҡ маскировкалап ҡуйылған туптар бер-бер артлы телгә килә, снарядтар дошман техникаһы өҫтөндә шартлай... Орудие тоҫҡаусыһы, гвардия сержанты Василий Глазунов тыныс ҡына, әммә йылдам эш итеп, тәүге атыуҙарынан уҡ дошмандың 2 танкыһын яндыра. Глазуновтың орудиеһына немецтарҙың "фердинанд" тип аталған штурм орудиеһы туп-тура килә, ара-тирә атып та ебәрә. Был мәлдә Глазуновтың тубы туҡтап ҡала, ә дошмандың үҙ йөрөшлө орудиеһы батыр артиллеристы тапап, иҙеп үтергә ниәт итә. Әммә ҡурҡыу белмәҫ тупсы, яҡын уҡ килеп еткән ҡеүәтле "фердинанд"ҡа терәп тигәндәй атып, уны ла яндырып ебәрә. Ул дошман артиллеристарын ошолай итеп яныпыштырып юҡ итә.

20 февралгә тиклем 16-сы һәм 15-се гвардия атлы дивизиялары дошман атакаларын кире ҡағып тора, ул Арнсвальде пунктын кире алырға теләй. 16 февралдә Реплин янында, 15 танкы артына ышыҡланып килгән бер батальон немец пехотаһы һөжүм башлай. Был алышта 148-се гвардия артминполкының 1-се батареяһының ут взводы ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтә, уның командиры - гвардия өлкән лейтенанты Юрий Азовкин. Дошман батальоны беҙҙең полктарыбыҙҙың боевой рәттәренә үтеп инә, шул саҡта Азовкиндың орудиелары телгә килә, немец һалдаттарының байтағы яралана йә иһә һәлак була. Мәргән артиллеристар бер нисә танкты сафтан сығара, әммә дошман үҙенең атакаларын бер нисә тапҡыр ҡабатлай. Беҙҙең эскадрондар ныҡ тора, атакаларҙы кире ҡағыуға өлгәшә. Алыш 6 сәғәт буйына бара. Ут взводы командиры үҙенең һалдаттары менән дошман пехотаһының тотош ротаһына ҡаршы тора. Взвод 6 танкыны, бер үҙйөрөшлө орудиене юҡ итә, немецтар 200-гә тиклем һалдат һәм офицерын юғалта. Ю. П. Азовкин яралана, әммә алыш яланын ташлап китмәй. Ҡыйыу командир үҙенең автоматынан 30 немец һалдатын сафтан сығара. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 31 майындағы Указы менән уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Шул уҡ Указға ярашлы, ошо уҡ юғары исемгә 76-миллиметрлы орудие командиры, гвардия старшинаһы Васильев Михаил Павлович та лайыҡ була. Наградаға тәҡдим итеү документында уның, Черниговтан башлап, бик күп операцияларҙа батырҙарса алышыуы хаҡында яҙылған. Польшаны азат итеү барышында Васильевтың орудие расчеты дошмандың 8 танкын, 4 бронетранспортерын, 3 пулеметын, 7 автомашинаһын юҡ итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Йөрәк һәр ваҡыт һиҙә бит ул: был театрҙа яҡшы кешеләр эшләүен баштан уҡ тойҙом. Ниндәй генә спектакль ҡуйһаҡ та, ниндәй образ тыуҙырһаҡ та - коллегалар менән эшләүе ҡыҙыҡ, тәжрибә алырға өлгөләр байтаҡ.*



**Театр сәнғәте республикабыҙҙа һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә: баш ҡалабыҙҙа эшләгән һәр театрҙың ижадын тамашасылар яратып күҙәтә, гастролдәргә килгән коллективтарҙы ауылдарҙа ла күтәреп алалар. Шулай ҙа заманыбыҙға күрәме, актер һөнәренә ҡарата йәмғиәтебеҙҙә ҡараштар бик үк ыңғай түгел, йәнәһе, аҡсалыраҡ эш кәрәк. Әммә беҙ яратып йөрөгән театрҙар, шөкөр, йәш белгестәр менән тулыланып тора. Был юлы М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының йәш актерҙары Әбйәлил ҮТӘБАЕВ һәм Динислам САФИН менән ижад, тамашасылар, театр тураһында әңгәмәләштек.**

# ЭҘЛӘГӘНЕҢДЕ

## НЫҠЫШМАЛЛЫҠ

**Егеттәр, гәзит уҡыусыларыбыҙҙы тәүҙә үҙегеҙ менән таныштырып үтегеҙ әле. Актер һөнәрен һайлауға нимә этәргес булды?**

**Ә. Үтәбаев:** Актер һөнәрен һайлауым бала сағымда миңә төбәп олатайым әйткән һүҙҙәрҙән башланғандыр, тим. Бер мәл уйнап йөрөгәндә ул миңә ҡарап: "Бына был, исмаһам, буласаҡ әртист!" - тип һоҡланғайны. Ул ваҡытта әле мәктәпкә лә йөрөмәй инем шикелле. Уның ошо һүҙҙәрен әсәйем дә гел иҫкә төшөрөп торғас, аңыма һеңеп ҡалған.

Ә бына Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһында уҡығанда "математика белгесе" булдым. Белмәйем нишләп, бәлки, аҡса етешмәгәнгәме икән, иҡтисадсы, банкир булырға хыялланa торғайным. Мәктәптән һуң Санкт-Петербург дәүләт урман хужалығы университетын тамамланым һәм Белорецка эшкә ҡайттым. Нәҡ шул осорҙа Белорет ҡалаһындағы "Ирәмәл" башҡорт халыҡ театрының эшмәкәрлегенә ҡушылып киттем. Төрлө концерттарҙа йырлап-бейеп, спектаклдәрҙә башта дөйөм сәхнәләрҙә ҡатнашып йөрөнөм, һуңынан "Ҡыҙ урлау"ҙа Шәкирйән ролен башҡарҙым. Бик оҡшай ине ошо эшмәкәрлегем. Ә шул уҡ ваҡытта эштә, офиста һәм урманда, бер үк ҡағыҙ эше, бөтәһен дә беләһең һәм ҡыҙығы ла юҡ, төшөнкө генә кәйефтә инем. Шулай ҙа өс йыл эшләп, Мәскәүҙәге М. Щепкин исемендәге Юғары театраль училищеға студенттар йыйыуҙарын ишетеп, конкурс үттем һәм актер һөнәрен үҙләштереп ҡайтырға насип булды. Милли йәштәр театрында 2021 йылдан эшләйем.

Актер һөнәренә шулай урау ғына юл үтеп килдем, әммә уны аңлы рәүештә һайланым. Әйтергә кәрәк, беренсе алған һөнәрең һинең холҡоңа һәм маҡсатыңа тап килгән осраҡта ғына артабан кәрәкле буласаҡ, тип уйлайым. Күптәр минең һымаҡ артабан эҙләнәләр ул. Тик эҙләгәнеңде табырға тырышырға кәрәктер. Ошо ныҡышмаллығым һөҙөмтәһе миңә ҡәнәғәтлек бирә.

**Д. Сафин:** Минең тамырҙарым Сибай ҡалаһынан. Мин дә бала саҡтан уҡ сәнғәткә яҡын булдым: балалар баҡсаһынан уҡ йырлап-бейеп йөрөгәнмен, һуңынан ҡурай түңәрәгендә лә, "Сармат" бейеү ансамблендә лә шөғөлләндем. Туғыҙынсы синыфта Өфөләге 5-се Спорт йүнәлешле республика мәктәп-интернатына уҡырға килдем: бала саҡта футболсы булыу хыялым бар ине. Әммә был һөнәрҙе күпкә иртәрәк үҙләштерә башларға кәрәклеген төшөндөм һәм кире Сибай ҡалаһына ҡайтып, Сәнғәт колледжына ҡурай бүлегенә уҡырға индем. Был бүлеккә мине уҡытыусылар "Һөнәргә өйрәтәбеҙ, ҡурайсылар кәрәк", тип ылыҡтырып алғайны. Ысынлап та бик әүҙем булдым, башҡорт эстрадаһында ла сығыш яһап өлгөрҙөм. Колледжды тамамлағас, Өфөләге З. Исмәғилев исемендәге сәнғәт институтына театр факультетына уҡырға индем һәм 2022 йылда тамамлағас, М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театрына эшкә саҡырҙылар. Хәҙер бына өсөнсө миҙгел эшләп йөрөйөм.

**Йәштәр театры һеҙҙе нисек ҡабул итте? Икегеҙ ҙә төп ролдәрҙе башҡарып өлгөрҙөгөҙ, ошоға бәйле хәтирәләрегеҙ ниндәй?**



**Ә. Үтәбаев:** Театрҙа иң мөһиме - ул коллектив. Беҙҙең М. Кәрим исемендәге Милли Йәштәр театрында коллектив бар, бөтәһе лә һәләтле һәм үҙенсәлекле, һәр береһе менән эшләүе ҡыҙыҡ. Шунан да мөһиме юҡ. Ә инде төп ролдәргә килгәндә, тәүге төп ролем "Герой йондоҙо" спектаклендә булды. Фәрит Әхмәҙиев менән Ольга Мусина ижад иткән пьеса буйынса ҡуйылған спектаклдә ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, осоусы Муса Гәрәев ролендә уйнаным. Уны 2022 йылда тамашасы иғтибарына тәҡдим иттек. Минең өсөн был бик иҫтәлекле ваҡиға булды, образға бөтә рухым менән бирелеп, тәьҫирләнеп уйнаным. Премьераға Муса Гәрәевтың улы Евгений Муса улы ла килгәйне һәм сәхнәгә саҡырып сығарғандарында уны ысынлап та үҙ улым кеүек ҡабул иттем. Беренсе төп ролемдән шундай ҡатмарлы, күңелдәрҙә уйылып ҡалыр хистәр кисергәйнем.

**Д. Сафин:** Эйе, эшкә килгән беренсе көндәрҙән үк беҙҙе матур итеп, ихлас ҡабул иттеләр. Апай-ағайҙар һис кенә лә үҙҙәрен әллә кем итеп тотманы, гример бүлмәһендәме, сәхнәләме, театрҙан тышмы, һәр саҡ ярҙам итәләр, кәңәш бирәләр. Йөрәк һәр ваҡыт һиҙә бит ул: был театрҙа яҡшы кешеләр эшләүен баштан уҡ тойҙом. Ниндәй генә спектакль ҡуйһаҡ та, ниндәй образ тыуҙырһаҡ та - коллегалар менән эшләүе ҡыҙыҡ, тәжрибә алырға, профессиональ яҡтан үҫергә өлгөләр байтаҡ. Футболдағы һымаҡ, "һин бында яңы ғына килдең, ултырып тор", тигән ҡараш юҡ.

Эшкә килгән йылда уҡ "Аладдин" әкиәтендә төп ролде башҡарыусы коллегамды алмаштырҙым, шунан балалар өсөн "Оҙонғолаҡтың Яңы йыл мажаралары"нда төп ролдә уйнаным. Ә киске спектаклгә килгәндә, былтырғы ижад миҙгелендә ҡуйылған "Мөхәббәт хаҡы" спектаклендә төп ролде башҡарам. Был спектакль Валентин Афониндың "Шекспир буйынса репетиция яһайбыҙ" тигән пьесаһы буйынса ҡуйылды, унда мин Ромео, Асҡар ролен башҡарам. Күп актерҙар Гамлет, Ромео, Отелло ролдәрен башҡарырға теләй, улар минең дә хыялда булды, әлбиттә. Ә мин ике миҙгел генә эшләп, Ромео ролендә уйнаным, шуның менән хыялдарым бөттөмө икән, тип көлөп алам.

**Ә. Үтәбаев:** Минең дә Гамлет ролен башҡарырға тигән хыялым бар, сөнки ул фәлсәфәүи, тормош мәғәнәһен эҙләүгә ҡоролған, донъяға ҡараштар тураһында. Икенсе бер хыялым - Гетеның "Фауст" әҫәрендәге Мефистофель образы өҫтөндә эшләү. Күптәр башта спектаклдәрҙә һөйгән йәр, ыңғай герой ролдәрен башҡарырға теләй. Минең дә башта шундай теләгем бар ине, хәҙер сәхнәгә ниндәйҙер кире образды сығарып ҡарағым килә.

**Д. Сафин:** Һәр кеше үҙенсәлекле һәм кем булыптыр уйнап ҡарау - ул үҙе бер бәхет беҙҙең өсөн. Ул кешене өйрәнеү, күҙәтеү, күңелен һәм уй-ниәттәрен аңларға тырышыу, шуны башҡаларға күрһәтә алыу ҙа уңыш. Шуға, ниндәй роль тәҡдим итһәләр ҙә яратып башҡарабыҙ. Минең бына бер осона сыҡмаған эш кеүек ҡалған образым бар: Өфө сәнғәт институтының икенсе курсында уҡығанда Мостай Кәримдең "Өн аралаш ете төш" пьесаһы буйынса Салауат ролен алып, бер өлөшөн сәхнәләштергәйнем. Шунда уҡытыусыбыҙ Таңсулпан Дәһи ҡыҙы Бабичева "Был әҫәрҙе диплом спектакле итеп ҡуйырбыҙ", тигәйне лә, ваҡытыбыҙ сикле булыу сәбәпле, килеп сыҡманы. Бына шул уйналмаған роль, Салауат батырыбыҙҙың образы үҙенә гел тартып тора.

*Юҡҡа ғына "башҡорт баш эймәҫ" тимәйҙәр, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан бит шул һүҙҙәр. Бына шул да сағылалыр башҡорт спектаклдәрендә. Шулай ҙа беҙгә ниндәй сифаттар хас, тип, ҡапыл ғына аңлатып әйтеүе лә еңел түгел. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ консерватив һәм күп яңылыҡтарҙы ҡабул итмәй. Төрлө үҙгәрештәргә ябайыраҡ ҡарарға, асығыраҡ булырға кәрәк.*

**Өлкәндәр өсөн ҡуйылған спектаклдә уйнауы ауырыраҡмы, әллә балалар өсөнмө?**

**Ә. Үтәбаев:** Өлкәндәр өсөн уйнауы ҡыйыныраҡтыр ул, шулай ҙа балалар өсөн ҡуйылған спектаклдәр ҙә күп көс талап итә. Сөнки әкиәттәр бер тапҡыр ғына уйналмай, етмәһә, уларҙы һәр ваҡыт көндөҙ, иртәнсәк уйнарға тура килә. Иртәнге спектаклдәрҙә физик яҡтан көс күберәк төшә. Балаларҙы алдатып булмай, әгәр спектакль ҡыҙыҡ булһа, бирелеп китәләр, оҡшамаһа - телефондарына текәләләр, һөйләшә башлайҙар, йә ҡытырлатып ниҙер ашап ултыралар. Балалар - ғәҙел тамашасы, уйынына дөрөҫ баһа бирәләр. Ҡыйынлыҡтары ла, үҙенә күрә ләззәтле минуттары ла бар һәр осраҡта.

**Д. Сафин:** Шулай ҙа балалар өсөн уйнауы ауырыраҡтыр ул, улар үҙҙәренә ҡыҙыҡ булғанды ғына ҡабул итә бит. Актер илке-һалҡы ғына уйнаһа, шул мәлдә үк иғтибарҙарын икенсе әйбергә күсерәләр. Шуға әкиәттәрҙе баштан алып аҙағына тиклем еренә еткереп уйнарға кәрәк.

**Беҙҙең өсөн театрға барыу, спектаклдәр ҡарау - ял итеү, күңел асыу булһа, һеҙгә ул - эш. Ә эштең арытып киткән мәлдәре лә була...**

**Д. Сафин:** Ҡышҡыһын Яңы йыл айҡанлы ҡуйылған спектаклдәрҙе уҡыусыларҙың каникулдары осоронда көнөнә 3-4, хатта 5 тапҡыр уйнайбыҙ ҡайһы саҡ. Ике аҙна дауамында иртәнге сәғәт 9-ҙан алып тирләп-бешеп әкиәт геройҙары булып сәхнәлә һикерешеп йөрөйбөҙ. Эйе, шундай мәлдәрҙә арып, ялҡыбыраҡ китәһең инде ул. Ғөмүмән, ижади көрсөк беҙҙең кеүек һәр сәнғәт кешеһенә хас күренештер. "Репетиция - төшкө аш - киске спектакль" кеүегерәк көндәр булып китһә, үҙ-үҙемә: "Мин дөрөҫ эшләйемме ул?", "Был кәрәкме ул?", "Нимә өсөн кәрәк?" тигәнерәк һорауҙар биреп алам. Кәйефең төшкән бер осор үтеп китһә, киренән дәртләнеп эшкә тотонаһың. Миңә бындай минуттарҙа ғаиләм, мөхәббәт ярҙам итә. Кешенең тормошо бит мөхәббәттән һәм иреклектән тора: үҙеңде ирекле тояһың икән, мөхәббәтең ҙур икән, ошо ике тойғо көс-дәрт бирә, ятҡан ереңдән этеп торғоҙа һәм аҡса эшләргә сығарып ебәрә.

**Ә. Үтәбаев:** Әлбиттә, төрлө мәлдәр була, оҡшап етмәгән ролдәрҙә уйнарға тура килеүе лә бар. Эшең өсөн лайыҡлы түләүҙәре мөһим булһа ла, беҙ бында аҡса эшләү өсөн генә килмәгәнбеҙ. Театрҙа эшләргә, тигән хыялыбыҙ, ошо эштән ҡәнәғәтлек алыу теләгебеҙ бар. Шуға төрлө образдарҙы һынландырып ҡарарға, хатта үҙеңдең тәбиғәтеңә бөтөнләй тап килмәгәндәрен дә килештереп уйнарға, шуның өсөн үҙеңде еңергә, һәләттәреңде һынап ҡарарға тигән теләк көслө. Оҡшап етмәгән ролдәр

***✓ Режиссер тамашасы күҙлегенән сығып, әҫәрҙең мәғәнәһен еткерергә тырыша һәм был спектаклдән һуң күңелдәр катарсис кисерергә тейеш, тигәнде маҡсат итә. Драманың төп тәғәйенләнеше шулдыр.***

# ТАБЫР ӨСӨН... кәрәк

балалар спектакле тураһында уйларға кәрәк.

**Д. Сафин:** Байрамдар булһа, "Һин бит әртис, әйҙә, йырла", йәки "Актер, әйҙә илап күрһәт", тигәнерәк һорауҙарҙы йыш ишетәбеҙ инде беҙ. Күҙ йәшеңде сығарып күрһәт, тиһәләр, мин ҡапылдан ғына быны булдыра алмайым. Ә бына кәләшемә шуны әйтһәң, ул да актриса, күҙҙәренән йәше килә лә сыға. Нисек улай итәлер, бөтөнләй аңлай алмайым. Актер булыу тормошта ярҙам итә, тип әйтә алмайым, шулай ҙа психолог күҙлегенән кешеләрҙе яҡшыраҡ аңлайбыҙҙыр, тим. Сөнки персонаждар буйынса фекер алышҡанда кешенең холоҡ-фиғелен, эске кисерештәрен яҡшы төшөнәһең. Шулай ҙа образдар араһында үҙеңде юғалтып ҡуймайым, тигән ҡурҡыу ҙа бар күңелдә. Өйҙә театрҙы һәм геройҙарыңды онотоп торорға тырышаһың.

**Ә автограф һорайҙармы?**

**Ә. Үтәбаев:** Бер нисә тапҡыр тура килде. Автограф биреү мөһим үк булмаһа ла, мөрәжәғәт итһәләр, тимәк, һине оҡшаталар, баһалайҙар кеүек тойолоп, күңелде күтәреүгә бер сәбәп була ала.

**Д. Сафин:** Башҡорт эстрадаһында йырлағанда автограф бирҙем. Йырсыларға был йәһәттән еңелерәк, ике-өс йыр яҙҙырһаң - йондоҙ, сәхнәлә йырлаһаң - һинең менән фото төшәләр, автограф та алалар. Ә бына актер булһаң, хәлдәр башҡасараҡ икән. Әкиәт уйнағандан һуң бәләкәс балалар фотоға төшөргә киләләр. Ҡайһы саҡ урамда ла танышйҙар.

булһа ла, бар күңелдән яратмағандары юҡ. Эштә улай арытып киткән мәлдәрҙә коллективыбыҙҙағы мөхитте күҙәтеү кеүек һөнәри сифатыбыҙ нык ярҙам итә миңә. Кемдеңдер кәйефе күтәренке була барыбер, шундайҙарға ҡарап, көс туплайһың, проблемаларың да онотола төшә.

**Актерлыҡ һәләтегеҙ тормошта нисектер ярҙам итәме һәм уның менән ҡулланаһығыҙмы?**

**Ә. Үтәбаев:** Был кешенең айырылғыһыҙ сифатылыр ул, уны эштә генә ҡулланып, театрҙан сыҡҡас, онотоп ҡалдырып булмай. Әлбиттә, ниндәйҙер мәлдәрҙә шул сифаттарың менән дә файҙаланаһың, тауыш-хәрәкәт менәнме күрһәтәһең, кешеләргә "йоҡтораһың". Һиңә ҡарап һоҡланалар, "Үәт, әртис" тиҙәр. Әйткәндәй, киске спектаклдәрҙә уйнаған образдарҙан йоҡлап киткәнсе тулыһынса арынып булмай. Ә иртәнсәк уянғас, Киләсәктә танылыулы актерҙар булып китһәк ине, тим инде...

**Театр 35-се юбилейлы ижад миҙгелен аса. Тамашасыларҙы ниндәй яңылыҡтар көтә?**

**Д. Сафин:** Эйе, яңы ижад миҙгелен 11-12 сентябрҙә "Мөхәббәт хаҡы" һәм "Мертвые души" спектаклдәре менән астыҡ. Тәүгеһен башҡорт труппаһы уйнай, ҡуйыусы режиссеры Рөстәм Хәкимов. Ә икенсе спектаклде Мөсәлим Күлбаев сәхнәләштерҙе, унда рус труппаһы ҡатнаша. Юбилейлы ижад миҙгеленә килгәндә, әле бына Мостай Кәримдең "Ҡара һыуҙар" поэмаһы буйынса буйынса режиссер Илсур Юлай улы Ҡаҙаҡбаев менән яңы спектакль өҫтөндә эшләй башланыҡ. Әбйәлил менән мин дә унда ҡатнашасаҡбыҙ.

**Ә. Үтәбаев:** Эйе, беҙҙең өсөн ул яңы режиссер, һөнәри оҫталығыбыҙҙы арттырыу өсөн бик шәп был. Илсур Юлай улы менән эшләүе күңелле тип әйтмәйем, әммә беҙ бик нык уйланабыҙ,эҙләнәбеҙ һәм шуныһы ҡыҙыҡ та. Һәр сәхнәне тикшереп ҡарайбыҙ, алмаштырабыҙ, нисек эшләһәк, яҡшыраҡ булыр икән, тип баш ватабыҙ.

**Һуңғы йылдарҙа ҡараңғы, ауыр спектаклдәр йыш ҡуйылған кеүек...**

**Ә. Үтәбаев:** Бәлки, художестволы биҙәлеш шундай тойғо ҡалдыралыр, белмәйем. Шуға ла тамашасыларҙа шундай фекерҙәр тыуғандыр. Режиссер тамашасы күҙлегенән сығып, әҫәрҙең мәғәнәһен еткерергә тырыша һәм был спектаклдән һуң күңелдәр катарсис кисерергә тейеш, тигәнде маҡсат итә. Был ваҡиға миңә яҡын, мине аңлайҙар, тигәнерәк фекер ҡалһын тамашасыла. Драманың төп тәғәйенләнеше шулдыр. Театр һәр ваҡыт күңел асыуға ғына ҡоролһа, ул театр буламы һуң? Бына эш ниҙә.



***Шулай ҙа балалар өсөн уйнауы ауырыраҡтыр ул, улар үҙҙәренә ҡыҙыҡ булғанды ғына ҡабул итә бит. Актер илке-һалҡы ғына уйнаһа, шул мәлдә үк иғтибарҙарын икенсе әйбергә күсерәләр. Шуға әкиәттәрҙе баштан алып аҙағына тиклем еренә еткереп уйнарға кәрәк.***

**Д. Сафин:** Күп тамашасы театрға күңел асырға, көлөргә килә. Әммә гел генә комедия уйнап йөрөһә, актер үҫешмәй. Алтын урталыҡ булырға тейеш һәр урында. Көлкө өсөн генә ҡуйылған комедияларға тамашасылар күберәк йөрөһә лә, драмаларҙы ла уйнарға кәрәк, кешене уйландырырға, йәмғиәтте борсоған ниндәйҙер мәсьәләләргә иғтибарҙарын йүнәлтергә кәрәк. Әле беҙ әҙерләгән "Ҡара һыуҙар" - бөгөнгө көнгә ауыздаш, ҡара төҫтәре лә, хатта ҡара һыуы ла булыр, бәлки. Театр кешеләрҙе уйландырырға ла тейеш бит.

**Театр төрлө фестивалдәрҙә лә ҡатнашып тора, үткән ижад миҙгелендә ниндәйҙәрендә булдығыҙ?**

**Ә. Үтәбаев:** Эйе, гастролдәрҙә йөрөп торабыҙ, һуңғыларынан Севастополдә үткән Балалар өсөн театр сәнғәте Бөтә Рәсәй фестивалендә "Айболит һәм Бармалей" спектакле менән ҡатнаштыҡ һәм ике номинацияла лауреат булдыҡ. Беренсе тапҡыр йәйге эҫе көндәрҙә коллектив менән йылы яҡтарға күмәкләп барып, кеше ҡарап, үҙебеҙҙе күрһәтеп, күңелдәрҙе күтәреп ҡайттыҡ. Бик оҡшаны, Алла бирһә, шулай төрлө фестивалдәргә юлдарыбыҙ асыҡ булһын. Матур хәтирәләр ҡалдырҙы был сәйәхәтебеҙ.

**Д. Сафин:** Үткән ижад миҙгелендә мин рус труппаһы менән Ҡалмыҡстанда үткән фестивалдә ҡатнашып ҡайтҡайным, унда ла ҡыҙыҡ булғайны. Төрлө халыҡ театрҙары килде, әммә беҙ унда оҙаҡ булманыҡ, ҡыҙғанысҡа күрә. Килеп спектакль уйнаныҡ та, икенсе көнөнә ҡайтып та киттек. Хәҙер күп фестивалдәр шулай үтә. Ә бына Севастополдә бер аҙна булдыҡ, шуныһы менән дә йәйге сәйәхәтебеҙ күңелгә ятты. Фестивалдең тәүмаҡсаты - актерҙарҙың, төрлө театрҙарҙың үҙ-ара аралашыуы бит. Ләкин хәҙер төнөн килеп етәһең дә, иртәнге аш ашап, репетиция уҙғараһың да, кискеһен уйнайһың һәм төнгө юлға ҡайтырға сығаһың. Бындай саҡта башҡа яҡтарҙан килгән коллегаларҙы күреп тә өлгөрмәйһең.

**Ә. Үтәбаев:** Эйе, театр фестивалдәре тамашасы өсөн генә түгел, ә коллективтарға ла тәжрибә уртаҡлашыу, ижадташтар һәм фекерҙәштәр табыу йәһәтенән мөһим. Шуны аңлаһын ине уларҙы ойоштороусылар.

Театр фестивалдәре быйыл үҙебеҙҙә лә ойошторолдо. "Туғанлыҡ" Халыҡ-ара милли театрҙар фестиваленең спектаклдәрен ҡараным һәм Европа классикаһын сәхнәләштерһәләр ҙә, бында һәр халыҡтың үҙ менталитеты, ҡараштары сағылыуын аңланым. Милләттең көсө - үҙенең сифаттарын башҡаларға күрһәтә, таныта белеүҙәлер.

**Ә беҙ үҙебеҙҙең сифаттарҙы беләбеҙме һәм сәхнәлә күрһәтәбеҙме?**

**Д. Сафин:** Драматик әҫәрҙәрҙе килештереп уйнау хас инде беҙгә, был халҡыбыҙҙың тарихи үткәненә лә бәйлелер. Быуындар аша күңелебеҙҙә шундай тойғо йөрөтәбеҙ, уны уйнарға ла кәрәкмәй, ул үҙенән-үҙе шулай килеп сыға. Һәр ваҡыт беҙгә ни өсөндөр ҡыйын, ирек тоймайбыҙ кеүек. Оялсанлығыбыҙ, баҫалҡылығыбыҙ ҙа сағыла спектаклдәрҙә.

**Ә. Үтәбаев:** Юҡҡа ғына "башҡорт баш эймәҫ" тимәйҙәр, ҡайҙандыр килеп сыҡҡан бит шул һүҙҙәр. Бына шул да сағылалыр башҡорт спектаклдәрендә. Шулай ҙа беҙгә ниндәй сифаттар хас, тип, ҡапыл ғына аңлатып әйтеүе лә еңел түгел. Ғөмүмән, беҙҙең халыҡ консерватив һәм күп яңылыҡтарҙы ҡабул итмәй. Төрлө үҙгәрештәргә ябайыраҡ ҡарарға, асығыраҡ булырға кәрәк. Бына ошо сифатыбыҙға киләсәгебеҙ нык бәйле. Мәҫәлән, интернет, онлайн-медиа өлкәһендә лә башҡорт үҙ урынын алып өлгөрөргә тейеш. Был эш әле яңы башланып ҡына тора, ә бының киләсәк быуындар үҙ туған телебеҙҙә һөйләшеү-һөйләшмәүенә лә туранан-тура йоғонтоһо бар. Әле үҫмерҙәрҙең русса ғына аралашыуын күреп йөрөйбөҙ, берәй ун йылдан күрәбеҙ инде башҡорт йәштәре ниндәй булырын. Хатта башҡорт ауылдарында ла үҫмерҙәр русса һөйләшә.

**Д. Сафин:** Бына тағы бер мөһим мәсьәләне хәтергә төшөрҙөгөҙ әле. Был һүҙҙәрҙе ҡап уртаға, ҡап-ҡара итеп яҙып ҡуйырға кәрәк: "Башҡорт спектаклдәренә йөрөгөҙ!" М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрына йөрөйҙәр, уларҙың күп йыллыҡ эш дәүерендә үҙ тамашасыһы барлыҡҡа килгән. Ә беҙгә тамашасылар улай уҡ эркелеп килмәй һәм балаларын да йөрөтмәйҙәр, айырыуса башҡортса әкиәттәргә. Шуға башҡорт актерҙары русса уйнап йөрөргә мәжбүр. Барыһы ла ғаиләнән башлана икәнен хәтерҙә тоторға кәрәк. Театр кешенең күҙен асыу, күңелен күтәреү, уйландырыу өсөн эшләй, ә беҙҙең башҡорт театрҙары тағы ла туған телебеҙгә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, туған тел мөхитен булдырыу маҡсатын да үҙ өҫтөнә алған. Баланы ата-әсәһе алып килмәһә, ул ошо хаҡта белмәйәсәк тә, аҙаҡ үҙе лә балаларын йөрөтмәйәсәк. Ауыл кешеһенә лә көнкүреш мәшәҡәттәренә һылтанып, гастролгә килгән коллективтарҙың тамашаларынан ситтә ятып ҡалмаҫҡа өйрәнергә кәрәк.

**Ә. Үтәбаев:** Республика буйлап гастролдәргә сыҡһаҡ, шөкөр, тамашасылар йыйыла. Айырыуса тыуған яҡтарыбыҙға ҡайтҡанда туғандарыбыҙ килә, күңелдәрҙе күтәрмәләп, баһалап ҡайталар. "Пушкин картаһы" буйынса класс менән килергә мәжбүр булған ҡыҙыҡһынмаусы балаларҙы ла ылыҡтырырға өйрәндек, тамашаларҙы оҡшатып, аҙаҡтан күҙҙәре янып, эргәбеҙгә фото төшөргә киләләр. Театр мөғжизәһе бына нисек эшләй!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәне ослап, йәштәр театрҙың тамашасыһыҙ һәм ғәҙел баһанан тыш эшләй алмауын, фекер алышыуҙың мөһим булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Килегеҙ, ҡарағыҙ һәм үҙ фекерегеҙ, уй-тойғоларығыҙ менән бүлешегеҙ, ә беҙ эшләрбеҙ һәм үҫешербеҙ", - тигән теләктәрен еткерҙеләр. Талантлы йәш актерҙарҙың киләсәге яңы үрҙәргә бай булырына һис шигебеҙ юҡ: улар бөгөндән тамашасы һөйөүен яулаған образдар тыуҙырып өлгөргән. Уларға үҙ юлын табырға, ҡомарланып ижад итергә, юғары маҡсаттар ҡуйып йәшәргә шарттар тыуҙырған М. Кәрим исемендәге Йәштәр театрының да киләсәге өмөтлө, юбилейлы 35-се ижад миҙгеле лә яңы үрҙәргә бай булһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Аят нимә ул? Бына ошо һорау борсой уны. Әммә нисек һорарға ғына белмәй. Һорамаһа ғына ярар ине, тип мин эстән теләктәр теләп торам. Сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, был һорауға минең дә яуап юҡ.*



КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!

# УЙЛАМАЙ ЯҘҒАН - АУЫРЫМАЙ ҮЛГӘН!



Уйлап-уйлап ултырам да, йәш саҡ - алйот саҡ, тип бушҡа әйтмәйҙәр икән, тип тағы берҙе уйлап ҡуям. Ҡуй инде, ҡуй, әйтмә лә инде, тип минең менән күптәр килешеп ҡуйыр, моғайын. Һай-һааай, тип баш сайҡап ҡуям, ваҡыты менән шул хәтлем алйот булырға тура килгән бит, хәтта хәҙер уңайһыҙ булып китә. Ошо урында кемдер, аҡыл һинә һаман да кермәгән, буғай, тип әйтеп ҡуйыр. Ана бит, тип төртөп күрһәтер ул, мәҡәләңдең дә исемен дөрөҫ яҙмағанһың. Дөрөҫө бит, уйламай һөйләгән була, тип әйтер ҡуйыр ул. Эйе, дөрөҫө шулай була. Әммә ошо урында халыҡтың "Ә шулай ҙа..." тигән тапҡыр һүҙҙәрен әйтергә тура килә. Ә шулай ҙа... уйламай яҙып та ауырымай ғына үлеп була икән. Бигерәк тә йәш саҡта. Был хәл яңы ғына өйләнешеп, "матур" ғына итеп тормош көтөп йөрөгән саҡта булды. Ней бысаҡты йүнләп үткерләй, ней балтаны йүнләп һаплай белмәгән саҡ. Хәтта йүнләп сөйҙә лә ҡаҡа белмәгән осор. Үҙегеҙ беләһегеҙ, ул ваҡытта көсһөҙ генә өргән елгә лә сөй китер ине ҡыйшайып. Сүкеш менән киҙәнгән мәлдә генә ел өрә, шаян сөй башын ситкә алып өлгөрә, ә һин - шалт бармағыңа сүкеш менән! Унан йөрөйһөң инде бер аяҡта бейеп! Баш бармағыңды ҡосаҡлап! Мәйтәм, йәш саҡта тормош көтөүҙең күп нәмәһен белмәйһең икән шул. Бигерәк тә беҙҙең быуын дини яҡтан белемһеҙ булды. Сөнки заманында ул тыйылған ине. Аңлатҡан-өйрәткән кешеһе булмағас, ҡайҙан ғына беләһең инде дин ҡағиҙә-тәртиптәрен. Хәҙер әҙ-мәҙ беләм дә ул. Әммә эш үткән. Сөнки дини белемһеҙлеккә бәйле был хәл күптән инде тарих биттәрендә урын алып өлгөргән. Бына ошо хәлде һөйләмәксе булам да инде мин һеҙгә.

Бер көн, туйҙа әйтелгән теләктәрҙе теүәл үтәп, беребеҙ ут, икенсебеҙ "һыу" булып, арманғыһыҙ булып, һыу эскеһеҙ итеп донъя көткән мәлдә беҙгә ҡайнаға килеп инде. Былай ул миңә яҡын ҡайнаға түгел. Алыҫ ҡына ҡайнаға. Сыбыҡ осо, тиһәң дә була. Сер итеп кенә әйтәм, хәтта ҡайнаға тимәһәң дә була. Ә шулай ҙа мин уны, әҙәпле кейәү булараҡ, һаулыҡ һорашып, яҡты йөҙ менән ҡаршы алдым. Хәтта, тәртипле кейәү булараҡ, сәй эсергә саҡырҙым. Хәл-әхүәлдә әҙерәк һорашып ултырғас, бер-бер артлы берике сынаяҡ сәй эскәс, ҡайнаға сынаяғын түңкәреп ҡуйҙы ла миңә борола төшөп төп йомошон әйтте.

- Шәмбе көн теүәл ун икегә беҙгә аятҡа килегеҙ.

Мин бер генә мәлгә аптырап ҡалдым. Ә шулай ҙа ышаныслы яуап бирҙем.

- Ярай, барырбыҙ, ҡайнаға.

Итәғәтле кейәү булараҡ, шартына килтереп өҫтәп ҡуйҙым.

- Саҡырыуығыҙ өсөн рәхмәт, ҡайнаға.

Тәрбиәле кешегә, моғайын, артыҡ булмаҫ, тип өҫтәй ҡуйҙым.

- Беҙҙе кешегә һанап...

Түр башынан төшөп килгән ҡайнаға миңә артабан һөйләргә мөмкинлек бирмәне.

- Ярай, булды, булды, кейәү, аңланым. Ҡыҫҡаһы, көтәбеҙ. Әле миңә ҡайныма инеп сығаһы бар. Ҡоҙаға ла әле әйтмәгәнмен. Ярай, именлектә күрешергә насип булһын.

Ҡайнаға шәп-шәп атлап китеп барҙы. Ә мин аптырап тороп ҡалдым: ә нимә була ул аят? Һис кенә лә ишеткән нәмә түгел бит әле. Ә һеҙ беләһегеҙме уның нимә икәнен? Бына һеҙ беләһегеҙ. Ә мин белмәйем. Шуны ла белмәйһеңме, тип әйтеп ҡуйыр кемдер. Белмәгәс, белмәйем инде. Башты тырнап апаруҡ торҙом мин тышта. Ысынлап та, ул аят тигәне нимә була икән? Ҡунаҡҡа оҡшаш берәй табын микән? Әллә йыйылышҡа оҡшаш берәй йыйын микән? Әллә һайлауға оҡшаш берәй нәмә булып, мине "аҡһаҡал" итеп һайларға уйлайҙар микән? Әллә һабантуйға оҡшаш берәй ярыш микән? Әллә, Аллам һаҡлаһын, төнөн йәшертен генә йөрөп "Буржуйҙарға көн бөтһөн" тигән листовка-фәлән йәбештерәү микән? Үҙегеҙ ҙә ишетеп торҙоғоҙ бит. Ҡайнаға ун икегә килегеҙ, тине. Әгәр көндөҙгә түгел, ә төнгә ун икегә йыйылырға булһа... Шуға был фараздың дөрөҫ булыуы ла ихтимал. Әллә ҡайнаға, ҡунаҡҡа килегеҙ, тип әйтте микән? Яңылыштан ғына аятҡа тип ыҫҡындырманы микән? Юҡтыр, тип ҡул һелтәп ҡуям мин. Аятҡа килегеҙ, тип ап-асыҡ әйткәнен үҙегеҙ ҙә ишетеп торҙоғоҙ бит. Аптырай биреп өйгә инәм. Кәләш шул арала һауыт-һабаны йыуып та өлгөргән. Уларҙы түңкәреп, өҫтөнә таҫтамал да ябып ҡуйған. Урындыҡ ситенә сүгәләй төшөп, мине көтөп ултыра ул. Мине күргәс, бер аҙ ҡалҡына биреп, миңә өндәште.

- Ҡара әле, уйламағанда-нитмәгәндә ағайым аятҡа саҡырып ҡайтты бит әле.

Беҙ бер аҙға тын ҡалдыҡ.

- Ҡара әле, хәҙер нимә эшләрбеҙ икән?

Мин йөҙөмә мөмкин тиклем уйсан ҡараш сығарып, әйтеп ҡуйҙым.

- Ҡара әле, тип тормайбыҙ инде, барабыҙ.

Кәләш тағы уйға батты. Нимәләр һорарға теләгәне хәтта йөҙөнә сыҡҡан. Ә нимә һорарын мин генә түгел, һеҙ ҙә белеп торағыҙ. Аят нимә ул? Бына ошо һорау борсой уны. Әммә нисек һорарға ғына белмәй. Һорамаһа ғына ярар ине, тип мин эстән теләктәр теләп торам. Сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, был һорауға минең дә яуап юҡ. Әммә минең өмөттәр аҡланманы. Сөнки шул мәл кәләш миңә өмөтлө тауышы менән өндәште.

- Ҡара әле, аят тигәне нимә була?

Мин аптырап киткән кеше булдым. Хәтта усты уҫҡа һуғып ебәргән булдым.

- Һәәәәй, шуны ла белмәйһеңме ней?

Кәләш бер килке миңә текләп тора ла уфтанып ҡуя.

- Ҡара әле, уны һин дә белмәйһең икән.

Нишләп белмәй тей, беләм, тип әйтеүҙән файҙа юҡ. Белмәгәс, нимә тип әйтәһең инде. Бер аҙ тапанып, бер аҙ башты тырнап торғандан һуң мин дә көрһөнөп, урындыҡ ситенә сүгәләй төштөм.

- Белмәйем шул... аяттың нимә икәнен...

Сәйҙе яңыртып ебәрҙек тә икәүләп уйға баттыҡ. Ысынлап та, ул аят тигәне нимә була икән? Хәҙерге заман булһа, интернет селтәрҙәренән яуапты һә тигәнсе табып алыр инек тә бит. Әммә беҙҙең заманда улай мөмкинлек булманы. Күрше-фәләндән һорашыр инең, бер төрлө уңайһыҙ һымаҡ.

- Оят, аятты ла белмәйҙәр!

Бына ошондай теләнә нәмә һөйләп сығарырға улар күп һорамаҫ. Ауыл ерендә кеше һүҙенә бер ҡалһаң, оҙаҡ сыға алмай йөрөйһөң бит ул. Шуға беҙ бер кемгә өндәшмәҫкә, бер кемдән дә һорашмаҫҡа булдыҡ. Был серле аятҡа ун икегә түгел, ә ярты сәғәткә алдараҡ барырға ҡарар иттек. Әгәр төнгә ун икегә килергә кәрәк була ҡалһа, берәй сәбәбен табып, ҡайтырбыҙ ҙа китербеҙ. Әгәр көндөҙгә ун икегә була ҡалһа, артыҡ зыян юҡ. Ярты сәғәт ваҡыт һә тигәнсә үтә лә китә ул. Хәҙер шәмбе тиҙерәк кенә етһен инде. Үлтереп аятты күрге килә!

Шәмбе көнө урамды бер итеп этеп йөрөп, матайҙы тоҡандырып алдым да кәләште һәм бәләкәй малайҙы ултырта һалып, һә тигәнсә ҡайнағаларға барып та еттем. Алдан һөйләшкәнсә, теүәл ун икегә түгел. Ә теп-теүәл ун икенсе яртыға. Ҡайнаға беҙҙе ҡолас йәйеп, әйҙүкләп ҡаршы алды.

- Әйҙүк, әйҙүк, һаумыһығыҙ, үтегеҙ. Йә, шунан, нисек килеп еттегеҙ? Юл нисек? Малтыуар нисек? Күршеләр нисек? Үҙегеҙ нисек? Малай үҫәме? Иртә килеүегеҙ бик һәйбәт булды. Кейәү, бар, һин өйгә инә тор. Хәҙер башҡалар ҙа килеп етәр. Оҙаҡ көттөрмәҫтәр. Ә һин, һеңлем, апайыңа ярҙам итешерһең. Әле ул аласыҡта йөрөй...

Мин башҡа яғын тыңлап торманым. Тиҙерәк өй яғына ҡарай уҡталдым. Сөнки унда мине серле аят көтә. Өйгә ингәс... бер килке аптырап торҙом. Ултырғыстар теҙелгән, өҫтәл ҡуйылған. Ә ашамлыҡ-фәлән юҡ. Аят тигәне ошолайыраҡ була микән? Ашау булмай икән, тип көрһөнөп ҡуйҙым. Белгәндә сәй эсеп киленә ине. Ҡара әле, өҫтәлдә тош-тош урында бәләкәй генә һауыттарҙа нимәлер ултыра. Нимә икән? Ипләп кенә телдең осо менән генә тәмләп ҡарайым. Тоҙ икән! Шунан башҡаларын да тәмләп сыҡтым. Бөтәһендә лә тоҙ булып сыҡты. Тимәк, тип уйлап ҡуям мин, бөгөн беҙ күмәкләшеп тоҙ ялайбыҙ! Аят тигәндәре ошолай була, күрәһең. Мәйтәм, берәй беҙгә лә туғандарҙы аятҡа саҡырып алыр кәрәк. Әҙерләнәһе-нейтәһе түгел, тоҙ ултыртаһың да тоҙ ялатаһың да ҡайтараһың! Берәү әйтмешләй, этем рәхәте.

Шул саҡ күҙем өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙ битенә төштө. Тәҙрә-ишек яғына күҙ һалғандан һуң (берәйһе килеп инмәһен тағы, уңайһыҙ булыр), ҡағыҙ битен ҡулыма алам. Ҡара әле, ниндәйҙер исемлек бит был. Фәлән фәләндең улы, төгән төгәндең ҡыҙы, тип яҙылған унда. Ниндәй исемлек икән? Мин бер аҙға уйға ҡалам. Шунан еңел һулап ҡуям. Был бит ҡунаҡтарҙың исемлеге! Нууу баш та инде үҙемдә, тип үҙемде маҡтап ҡуям. Ә шулай ҙа был исемлектә нимәлер етмәгән һымаҡ. Нимә етмәй икән? Иғтибар менән тағы берҙе уҡып сығам. Шунан тағы берҙе... Ҡара әле, тип маңлайға һуғып ҡуям, был исемлектә мин юҡ бит! Ҡайнаға беҙҙе, бәлки, килмәҫтәр, тип уйлағандыр инде. Шуға күрә беҙ юҡтыр. Мәйтәм, улай булмай. Берәү әйтмешләй, һәр ерҙә тәртип кәрәк. Тиҙ генә ҡәләм таба һалып үҙемде исемлеккә индереп тә ҡуйҙым. Ә ысынында иһә мин үҙемде мәрхүм-мәрхүмәләр исемлегенә индереп ҡуйғаным икән! Кем белгән инде уныһын. Бая ғына берәү, уйламай һөйләгән - ауырымай үлгән, тигән әйтем дөрөҫ, тип, әллә кем булып ултыра ине. Юҡ шул, дәрт итһәң, уйламай яҙып та ауырымай үлеп була икән. Нимә көләһегеҙ? Көлмәй торогоҙ әле. Ҡыҙығы әле башланырға ғына тора.

Бер мәл саҡырылған ҡунаҡтар йыйылып бөттө. Был юлы, алдан килгән урын өсөн, тигән әйтем нишләптер тура килмәне. Иң үрҙән урын алып өлгөргәйнем ул былай. Килгән ҡунаҡтар инә торҙо, минең менән ололап һаулыҡ һорашып торҙо. Мәйтәм, мине беләләр, мине ололайҙар (ә кем белгән инде муллаға тәғәйен урында ултырғанды). Бер мәл өйгә ҡайнаға килеп инде. Бер килке миңә текләп торғандан һуң ҡырҡа әйтеп ҡуйҙы.

- Кейәү, һинең урының бына ошонда!

Нишләйһең, табындың иң түренән уның иң ситенә күсеп ултырырға тура килде. Ярай, мәйтәм, ҡайнаға, беҙгә тағы килерһең әле. Һинең дә урын булыр ситтә. Бына бер мәл саҡырылған ҡунаҡтар тамам йыйылып бөттө, буғай. Әммә улар үҙ-ара шыбырлашып һөйләшеп тик ултыра. Әллә тағы берәүһен көтәләр микән? Түрҙә ултырһам, мин дә кеше һымаҡ һөйләшеп ултырыр инем. Ситтә ултырғас, һөйлә-

***✓ Һаман да ҡотола алмаусыларға бер кәңәшем бар: эсеүҙе ташлауы ап-анһаты, ә бына айыҡ тормош менән йәшәй башлауы - иң ауыры. Холоҡто шунда уҡ үҙгәртеп булмаһа ла, йәшәү рәүешен үҙгәртеп була.***



шерлек кешеһе лә юҡ. Етмәһә, минең эргәлә ултырғаны минә ҡабырғаһын ҡуйып ултырҙы ла күршеһе менән шыбыр-шыбыр килеп һөйләшеп тик ултыра. Шуға мин тын ғына ултырам. Ҡайнағаны әйтәм, бер урында тыныс ҡына ултыра алмай. Бер өйҙән сыға, бер кире килеп инә. Кемдәлер көтә, тигән уй дөрөҫ булып сыҡты. Шул мәл, әссәләмәғәләйкүм, тип берәү килеп инде. Мулла икән! Уға ҡайнаға урынды табындың түренән (әлеге лә баяғы минең тәүге урынды) бирҙе. Мулла тамаҡ ҡырып, башҡаларға күҙ йөрөтөп сыҡты ла төп һүҙен башланы.

- Йә, йәмәғәт, булмаһа, башлайыҡ.

Мулланың нимә һөйләгәнен, нимә аңлатҡанын һөйләп тормайым. Оҙаҡ булыр. Хәбәремдең төп өлөшөнә күсәйем. Уны ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та тип атап булалыр. Бына бер мәл мулла барыбыҙға ла күҙ йөрөтөп сыҡты ла ошондай һорау бирҙе.

- Барығыҙ ҙа тәһәрәтлеме?

Был һүҙҙе ишетеү менән бер нисә кеше ырғып тороп тышҡа сығып китте. Мулла нишләптер минә бик һынамсыл теклӛп торҙо ла минән тәғәйен һораны.

- Тәһәрәтең бармы?

Мулланың нимә талап иткәнен мин ҡайҙан ғына беләйем? Мейе тегеләй-былай уйлаған арала минең күҙҙәр уның башындағы түбәтәйгә төштө. Моғайын, һүҙ түбәтәй тураһында баралыр, тигән еңеле фекер килде мейегә. Мин ҡыуанып киттем.

- Бар!

Ҡалған яғын тын ғына ултырһам да була ине. Мулла минә һаман шикле теклӛп ултырғас, аптырағандан өҫтәп ҡуйҙым:

- Тик өйҙә ятып ҡалған!

Мулла аптырап китте. Ә шулай ҙа ҡәтғи талап ҡуйҙы:

- Нисек өйҙә ятып ҡалған? Тәһәрәтһеҙ булмай!

Мин аптырай биреп унан һорай ҡуйҙым:

- Ошонда ғына эшләһәм буламы?

Мулла аптырауҙан саҡ артына ҡолап китмәне, буғай.

- Нимәне?

Мин тыныс ҡына яуап бирәм.

- Тәһәрәтте!

Мулла нимә әйтергә белмәй ыҡ-мыҡ иткән арала кеҫәнән ҡулъяулыҡ сығара һалып, уның дүрт мөйөшөн төйөнләй һалып, башыма ҡаплап та ҡуйҙым. Һәм муллаға өндәштем.

- Бына хәҙер мин тәһәрәтле!

Мулла ҡайнағаға борола төшә һәм унан һорай ҡуя.

- Был кем ул?

Ғүмере тотлоҡмаған ҡайнаға тотлоғоп алды ла китте.

- Ке-ке-ке...

Шул саҡ мулла ҡайнағаның арҡаһына йоҙроғо менән мул ғына итеп тондорҙо. Минә һуҡһа, билләһи, үпкә осоп сығып китәр ине. Ә ҡайнағаның ауыҙынан һүҙҙәр генә осоп сығып китте.

- йәү була беҙҙең!

Шул арала сығып киткән ҡунаҡтар кире килеп инеп, үҙ урындарын алып өлгөрҙө. Мулла минә ҡарап торҙо ла ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

- Ярай, йәмәғәт, аятты дауам итәбеҙ.

Ҡалған яғы шыма ғына китте былай. Тәүге ҡыҙыршылыҡ баяғы исемлекте алғас башланып китте. Аяттың тәртибе буйынса ҡайнаға һәр "ҡунаҡты" әйтеп тора. Ә мулла уларҙың һәр кеменә айырым, әмин, тип ултыра. Ҡайнаға һуңғы "мәрхүмгә" килеп еткәс, тағы тотлоғоп алды ла китте! Ахырҙа мулла исемлекте уның ҡулынан һыпыра тартып алып, минең исемшәрифте ап-асыҡ итеп әйтте лә, әмин, тип битен һыпырып та ҡуйҙы. Ҡайнаға уның еңенән тарта-тарта саҡ әйтә алды.

- Һу-һу-һуңғыһы кәрәкмәй.

- Нишләп кәрәкмәй.

- Ул әле ү-ү-үлмәгән.

- Нисек үлмәгән?

- Ул а-а-ана ултыра.

Мулла бер минә ҡарай, бер ҡайнағаға ҡарай, бер исемлеккә ҡарай. Шунан аптырай биреп һорай ҡуя.

- Ә кем уны яҙған?

Ҡайнаға минә төртөп күрһәтә.

- Ү-ү-үҙе яҙған!

Мулла ҡайнағаға өндәшә.

- Кейәү тейһеңме?

Ҡайнаға тотлоға-тотлоға яуап бирә.

- У-у-ул минә яҡын ке-ке-кейәү түгел. А-а-алыҫ ҡына ке-ке-кейәү була. Сыбыҡ осо инде шунда. Ке-ке-кейәү тимәһәң дә бу-бу-була!

Үәт, әй, тик торғанда кейәүлектән дә төшөп ҡалынды. Мин ни эшләргә белмәй, аптырағандан ашъяулыҡтағы тапты уң ҡулдың һуҡ бармағы менән тызып алдым да киттем. Тик арала нишләптер һул ҡолаҡ ҡысып алды ла китте. Уныһын һул ҡулдың һуҡ бармағы менән соҡой башланым. Етмәһә, ара-тирә иҫнәп тә ҡуям шунда. Мулла бер килке мине йәллӛп ҡарап ултырҙы, буғай. Шунан ҡайнағаға борола биреп, унан һорай ҡуя.

- Ә былай уның бөтәһе лә "өйҙәме"?

Ҡайнаға өндәшмәй. Бары тик яуырындарын күтәрә биреп, кире төшөрөп ҡуя.

Мулла һығымта яһап ҡуя.

- Киленгә түҙемлек бирһен инде.

Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, киленгә кемдер түҙемлек бирмәй. Тик ултырһа ла булыр ине. Әммә ул бер аҙ ҡалҡына биреп, мулланың һорауына асыклыҡ индереп ҡуя.

- Өйҙә берәү ҙә ҡалманы. Бөтәбеҙ ҙә бында. Ана, малай аласыкта йоҡлап ята.

Мулла бер минә, бер кәләшкә күҙ йүгертеп алғандан һуң, уфтанып ҡуя.

- Матур йәшәгеҙ инде. Икегеҙ ҙә пар килгәнһегеҙ былай.

Ошо урында халыҡтың "Ә шулай ҙа..." тигән тапҡыр һүҙҙәрен тағы бер әйтер инем мин. Ә шулай ҙа... йәш саҡта бер аҙ алйот булырға кәрәктер ул. Йәштән аҡыллы булһаң, һағынып һөйләрлек хәл-ваҡиғалар ҡайҙан ғына булһын инде...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ХӘТЕРКИТАП

# СЫЙЫРСЫҠ



Көндәр йылытып, ҡоштар килә башлау менән хеҙмәт дәресендә уҡытыусы Мөхәмәҙей ағай өйгә эш бирҙе:

- Был фәҡәт малайҙарға ғына ҡағыла, киләһе дәрескә бөтәгеҙ ҙә сыйырсыҡ оялары эшләп алып килегеҙ! Яҡшы ояларҙы күргәҙмәгә ҡуйғандай итеп, мәктәп баҡсаһындағы ҡайындарға элербеҙ, журналға ҡуйылған баһа ла юғары булыр!

Әйтеүе генә анһат, алып килегеҙ, имеш, етмәһә, киләһе дәрескә! Таҡтаны ҡайҙан табырға, тиһең, ҡаҙауын, бысҡы, йышҡыһын, ҡасауын? Класташ малайҙарға рәхәт инде ул, бөтәһе лә ҡул аҫтында, күҙ алдында, өҫтәүенә, аталары ярҙам итһә...

Шулай ҙа башҡаларҙан ҡалышып булмай бит инде, керештем эшкә: уҫаҡ булһа ла таҡтаһын да таптым, баһыу буйынан һурыштырып, ҡаҙауын да, күрше ағайҙан үтмәҫерәк булһа ла ҡул бысҡыһын, тотоноуҙан үткән йышҡыһын алып торҙом, ә бына ҡасау табып булманы, оя тишеген этләнә-йонсой бысаҡ менән соҡорға тура килде. Эш барышында бармаҡҡа бер нисә тапҡыр сүкеш менән тондорҙом, терһәк буйын ҡаҙау һыҙырып ебәрҙе. Тирләй-бешә, бышлыға торғас, ике көндән сыйырсыҡ ояһы әҙер ине инде, тик был күрмәлекһеҙ эшемде нисек итеп мәктәпкә алып барырға? Алып бармаҫ та инем, уҡытыусы, өйгә эште эшләргә теләмәгәнһең, тип бәйләнәсәк, йәнә "ике" билдәһе ҡуйһа, йыл аҙағында хеҙмәт дәресенән "өслө" сығыуын көт тә тор, ул саҡта инде эшкинмәгән бер ялҡау фиғелендә ҡаласаҡһың. Киттем мәктәпкә кәртә аҫтынан ғына сыйырсыҡ ояһын ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып.

Бөтә малайҙар ҙа эштәрен тотоп килгән. Һүҙ ҙә юҡ, атайҙары килештереп эшләп биргәндәр, йышҡылар менән ялтыратып йышылған ояларҙы тот та хәҙерҙән үк күргәҙмәгә ҡуй: сыйырсыҡ ояларының түңәрәк, дүртмөйөш тишекле, тура, ҡыйғас, өй түбәләре ише ике ҡыйыҡлылары бар. Минекен күргәс әсе телле Мирза ауыҙын мыҫҡыллы салшайтты: "Бынаға тауыҡ тәпәйе генә етмәй, ул сағында Мәскәй әбей өйөнә оҡшап ҡалыр ине!"

Дәрес башланды. Мөхәмәҙей ағай минән һораны:

- Үҙең эшләнеңме?

- Үҙем!

- Бер кем дә ярҙам итмәнеме?

- Кем минә ярҙам итергә тейеш һуң?

- Ярай, ҡустым, һәр ваҡыт үҙеңдең көсөңә генә ышанып, таянып йәшә, башҡаларға ауырлығыңды һалма. Яҡшымы-яманмы, эшләгәнең һәр саҡ үҙеңдеке булһын!

Шулай тине лә, башҡалар менән бер рәттән журналға минә лә "бишле" ҡуйҙы. Мирза ғына ҡуйырҙан-ҡуймай: "Гәҙел түгел, ағай, минең оя кәртинкә һымаҡ, Хәйҙәрҙеке ише ҡараҫҡы түгел!"- тип һүҙ ҡыҫтырып маташты. Уҡытыусы минә бәйләнеүҙе яуапһыҙ ҡалдырһа ла, тегене тынысландырырға теләпмелер, былай тине: "Эшләгәнеңде бында ҡалдырырһың, мәктәп баҡсаһына элербеҙ!"

Алып ҡайттым ояны. Уны һайғауға беркетеп, һарай мөйөшөнә терәп күтәреп, ҡалҡытып ҡуйҙым. Таң һыҙылыр-һыҙылмаҫтан тупһаға ултырып суҡайҙым. Хәҙер ҡояш сығыу менән сыйырсыҡтар ауыл буйлап осоп, оя һайларға керешәсәктәр. Күпме генә көтһәм дә ояма яҡынлаусы бер генә ҡош та күренмәне. Бер көн үтте, ике көн. Тамам өмөтһөҙләккә бирелдем. Иҫәбем - бөгөн үк ояны төшөрөү, тормаһын донъяны йәмһеҙләп. Шулай ниәтләп, урынымдан торғайным ғына, һыйыр һауып ингән әсәйем ҡыуаныслы хәбәр һалып һөйөнсөләне: "Балам, сығып ҡара әле ояңды!" Тышҡа атылдым. Сыйырсыҡ оям түбәһенә ҡунған да ҡанаттарын елпеп һайрай ине! Ҡыуанысыма сыҙамай, урынымда бейеп алдым да кире өйгә индем: "Әсәй, әгәр сыйырсыҡ китеп барһа? Осраҡлы ғына ҡунманы микән ул беҙҙең оя-ға?" "Китмәҫ! Китер ҡош улайтып талпынып һайрап ултырмай ул!"

Шуныһы гәжәп, сифатлы ҡарағай таҡталарҙан йышып эшләнгән матур ояларҙың күбеһе ул йылды буш тороп ҡалды, уларҙы әрһеҙ турғайҙар биләне. Һайрар ҡоштар ҡайҙа ҡунырға, һайрарға, моңон түгергә белә икән ул. Улар илһам ҡошона тиң!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠЫРҠ - ҮҘГӘРЕҮ МӨҘҘӘТЕ



**Егерме алты йыл айыҡ тормош алып барам. Һәр көнөмдө Хоҙайҙың оло бүләге тип ҡабул итәм. 38 йәшемдә ҡотола алдым был йоғонтонан. Гәзиттә һәм китабымда яҙған фекерҙәремде ҡабатламайынса ғына, шуны әйтә алам: эскелектең нимә икәнлеген дә белмәгән йәштәрҙең үтә лә күп булыуы уғата һөйөндөрә.**

Әммә эсеүселәр юҡ түгел, шулай ҙа эскелек беҙҙең милли фажиғәгә әүерелмәне, ул айырым кешеләрҙең генә проблемаһы булып ҡала.

Һаман да ҡотола алмаусыларға бер кәңәшем бар: эсеүҙе ташлауы ап-анһаты, ә бына айыҡ тормош менән йәшәй башлауы - иң ауыры. Холоҡто шунда уҡ үҙгәртеп булмаһа ла, йәшәү рәүешен үҙгәртеп була.

Киң билдәле бер риүәйәтте тағы ла ҡабатлайым: "Донъя менән хушлашыр алдынан атаһы улына бер генә үкенесе барлығын әйткән: улын дин юлына килтерә алмаған. Шулай ҙа васыятын да еткергән: "Минең йыназанан һуң 40 көн дауамында көн һайын мәсеткә барып, имам-хатибҡа ойоп, намаҙ уҡыһаң, һинә риза булырмын..." Улы атаһының әйткәнен үтәгән, 40 көн буйы мәсеткә йөрөгән һәм... эйе, 41-се көндә мәсеткә үҙе килгән һәм дин юлына баҫҡан".

Йәшәү рәүешен үҙгәртеү мөҙҙәте лә 40 көнгә тиң. Юҡҡа ғына был һан "ҡырҡ" тип аталмаған. Ҡырҡ, йәғни үҙгәреү, ҡырҡылыу мөҙҙәте. Кеше ҡырҡ йәшендә йәшлеге менән хушлаша. Бер көн башҡарылған эш - ғәмәл, әгәр ҙә ул ҡабатланһа - ҡылыҡ, ҡырҡ көн ҡабатланһа - ғәҙәт, артабан - холоҡ, ә холоҡ ул - яҙмыш...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИТЛЕ РИЗЫҠТАН...

■ Оксфорд университеты белгестәре итле ризыҡтарҙан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары хәүефен 32 процентҡа түбәнәйтә, тип раҫлай. Ғалимдар 11 йыл буйына Англия һәм Шотландияла йәшәүсе 44 мең ярым кешене тикшергән, уларҙың 15 меңдән ашыуы вегетариан булған. Ошо ваҡыт эсендә 169 ҡатнашыусы йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән үлгән, тағы ла меңдән ашыуы ошо ауырыу менән табиптарға мөрәжәғәт иткән. Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, улар барыһы ла ит, балыҡты йыш ашаған. "Беҙ бының менән итле ризыҡтар ашауҙан бөтөнләй тыйылырға ҡушмайбыҙ, бары тик туҡланыуҙың сәләмәтлек торошона йоғонтоһо барлығын ғына иҫегеҙгә төшөрәбеҙ". Шулай ҙа, табиптар фекеренсә, ит ашамау һеҙәмтәһендә артериаль ҡан баҫымы һәм ҡандағы холестерин кимәле төшә, шулай уҡ тән массаһы нормаға килә,ә был факторҙар йөрәк сәләмәтлеге менән бәйле.

■ Һуңғы осорҙа сәләмәт йәшәү рәүешен өҫтөн ҡуйыусылар һаны артҡан. Әммә психологтар сәләмәт туҡланыу менән бәйле булған орторексия сиренең артыуын да билдәләй. Бактиһәң, ҡамыр аштары, май, сүпрәле аҙыҡтар, кофеиндан тулыһынса баш тартыу кешене бәхетһеҙ яһай икән. Психологтар әйтеүенсә, туйғансы ашамау һәр ваҡыт депрессияға алып килә, хроник сирҙәр киҫкенләшә.

■ Японияның Милли радиологик фәндәр институты белгестәре раҫлауынса, һағыҙ сәйнәү уйлау процесын әүҙемләштерә, реакцияның тиҙлеген күтәрә. "Медицина мәғлүмәттәре селтәре" хәбәр итеүенсә, ғалимдар үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, һағыҙ сәйнәргә яратыусыларҙа был сифаттар 10 процентҡа юғарыраҡ булып сыҡҡан. Әммә улар һандар һәм хәрефтәр бағанаһын насарыраҡ хәтерҙә ҡалдырған. Йәғни, һағыҙ сәйнәү ҡыҫҡа ваҡытлы хәтерҙе насарайта, ә оҙайлыһын әүҙемләштерә, тип аныҡлай ғалимдар.

■ Ҡайһы бер врачтар әйтеүенсә, бөгөнгө икмәк ризыҡтары кеше организмына бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй. Аҡыл кәүәһенең түбәнәйеүе тап икмәк ризыҡтарын күп ҡулланыу менән бәйле булыуы ихтимал, ти ғалим. Сөнки бойҙайҙың заманса сорттарында генетик яҡтан үҙгәртелгән аҡһым бар, ул дауами арыусанлыҡ һәм артыҡ ауырлыҡҡа сәбәп.

■ Майами университеты (АҠШ) хеҙмәткәрҙәре раҫлауынса, насар хәбәрҙәрҙән кешеләр артыҡ ауырлыҡ йыя башлай. Бактиһәң, негатив мәғлүмәт ишеткәндән һуң, кеше, үҙе лә һиҙмәҫтән, борсолоу тойғолары кисерә һәм юғары калориялы продукттар ҡуллана башлай, сөнки стресс ҡорбанына әүерелә. Ындайҙар насар яңылыҡтарға иҫе лә китмәүселәргә ҡарағанда көнөнә 40 процентҡа күберәк ашай икән. Тикшеренеүҙәр Америкала президент һайлауҙары тамамланған осорҙа үткәрелгән. Президент кампанияһы мәлендә иҡтисад насарайыуы, сәйәси хаталар тураһында күберәк һөйләнә. "Был мәғлүмәттәр кешеләрҙе күберәк калория ҡулланырға мәжбүр итә, сөнки уларҙа эволюцияның миллион йылдары эсендә барлыҡҡа килгән инстинкт уяна. Улар "мәлен файҙаланып, туйғансы ашап ҡал" тигән принципҡа эйәрә һәм калориялы аҙыҡты ауыр көндәр өсөн "запас"ҡа тинләй. Шуға ла кем артыҡ ауырлығынан ҡотолорға теләй, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барғыҙ һәм насар яңылыҡтар тыңламағыҙ", - тип билдәләй профессор Джулиано Ларан.

ЭШҠЫУАРЛЫҠ МӘКТӘБЕ

**Үҙ эшен асып, уны уңышлы алып барған һәр кем һоҡланыуға лайыҡ. Дәүләт эшендә эшләүселәр айына ике тапҡыр мотлаҡ рәүештә эш хаҡы ала, йәғни улар алдан шул көндә шул суммала аҡса киләсәген белә. Ә үҙенә эшләүселәрҙең бындай өҫтөнлөгө юҡ, улар тик үҙҙәренә генә ышана ала, йәғни уңһалар ҙа, туңһалар ҙа бары тик үҙҙәре. Шуға күрә үҙ эшен асырға теләп тә батырсылыҡ итмәгәндәр күп арабыҙҙа. Шул уҡ ваҡытта бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, тормошон ҡырҡа үҙгәртеп, хыялын ысынбарлыҡ итергә тырышыусылар ҙа етерлек. Бөгөнгө әңгәмәсем Айгөл ҠУЖАГИЛДИНА нәҡ ошондай тәүәккәлдәр рәтендә.**

# ИКЕЛӘНМӘҪКӘ, ТӘҮӘККӘЛЛӘРГӘ!



- Хәйбулла районының Татыр-Үҙәк ауылында ябай ғаиләлә тыуып үҫтем. Атайым (хәҙер мәрхүм инде) Бүребай тау-байыҡтырыу комбинатында электрик, әсәйем шунда уҡ котельныйҙа оператор булып эшләнеләр. Әлеге ваҡытта әсәйем Себер тарафтарында вахта менән йөрөп эшләй, ул - ашнаҡсы. Ике ағайым бар, береһе - "Башмедь" ойошмаһында эшләй, икенсе ағайым хәрби хеҙмәттә. Мәктәптән һуң бухгалтер һәм аудит һөнәрҙәрен үҙләштерҙем, Өфөлә телевидениела эшләнем.

Мин һәр саҡ үҙемә "саҡырыу" эшләргә яратам. Ниндәй кимәлгә тиклем ҡыйыу булыуымды асыҡларға тырышам. Шулай уҡ мин "кеше һәр ваҡыт үҙенең теләгенә өлгәшә ала", тигәнгә ышанып йәшәйем. "Ныҡ теләгәндә, тырышҡанда космосҡа ла осорға була", тиҙәр бит, мин бының менән тулыһынса килешәм. Шулай уҡ үҙемдең холҡомда һәр ваҡыт яңы нимәлер белергә тырышыуымды, төрлө өлкәгә ҡағылышлы ҡыҙыҡһыныуҙарымды баһалайым. Тағы ла мин оҙон-оҙаҡ уйларға яратмайым, шикләнеүҙәргә бирелмәйем. Хәл иттем икән - тотам да эшләй башлайым. Яҡшы сифатмы был, насармы - кемгә нисектер инде.

Өфө ҡалаһының Нуғай ҡасабаһында магазин асыуға килгәндә лә шулай булды. Ошо эшкә тотонорға ҡарар итеүемә бер аҙна тигәндә, мин урын табып, килешеү төҙөп, материалдарға заказдар биргән инем инде. Әлбиттә, ҡурҡыу булды. Бөтөнләй ҡурҡытмаһы тиһәм, алдашыу булыр ине. Ныҡлы ҡарарға килер алдынан бөтә ыңғай һәм кире яҡтарҙы анализлап сыҡтым да тәүәккәлләнем. "Нимәнелер теләү" һәм "нимәнелер булдырыу" араһында хәүеф ята һәм һин уны йәки аша атлап үтәһең, ҡурҡыуыңды еңәһең һәм уңышҡа өлгәшәһең, йәки был тойғоға баш эйәһең һәм урыныңда тапанаһың. Быны һәр кем үҙе хәл итә.

Магазин асыу еңел түгел. Иң тәүҙә алға финанс мәсьәләһен хәл итеү килеп баҫа, сөнки бинаны ҡуртымға алыу, материалдар, уларҙы алып килеү, урынлаштырыу өсөн эшселәргә түләү һәм башҡа сығымдар бик күп. Мин был мәсьәләне фатирымды һатып хәл иттем. Фатир ипотекала ине, уны һатҡандан һуң банк менән иҫәпләштем һәм ҡалған аҡсаны тулыһынса магазинды асыуға тотондом. Был аҙымға барыуыма үкенмәйем, ул тулыһынса үҙен аҡлаясағына ышанам һәм ошоға ынтылам.

Кеше һәр ваҡыт үҫешергә, уҡырға, яңы мәғлүмәттәр белергә ынтылырға тейеш, тип уйлайым. Мин үҙем һәр саҡ ниндәйҙер курстарҙа уҡыйым, семинарҙар тыңлайым һәм башҡа төрлө белемемде камиллаштырам. Ындай уҡыуҙар бары тик эште алға алып барыу өсөн генә кәрәк тип уйлау хата. Улар кеше менән дөрөҫ мөнәсәбәттәр булдырыу юлдарын аса, яңы дуҫтар табырға булышлыҡ итә, төрлө яҡлап тәжрибә туплауға килтерә, энергияны арттыра, донъяға ҡарашты киңәйтә. Шулай уҡ төрлө ҡалала үткән курстарға йөрөү - ул үҙе бер бәләкәй генә сәйәхәт. Ә сәйәхәт кешене бер урында тапаныуҙан азат итә, ҡайны саҡта оҙаҡ сиселмәгән мәсьәләне хәл итеү ысулын да аса.

Үҙ эшен башларға теләп тә, ҡыйыулыҡ итмәгән йәштәргә теләгем - ҡурҡмағыҙ, ҡыйыу булығыҙ. Бөгөнгө көндә төрлө өлкәлә эшҡыуарлыҡта үҙенде һынап ҡарарға була. Ҡурҡыу, асылда, бөтөнләй юҡ ул, барыһын да беҙ үҙебеҙ уйлап сығарабыҙ. Әгәр ҙә мейелә ниндәйҙер идея, фекер бар икән, тимәк, уны хәл итеү һәм ысынбарлыҡҡа ашырыу юлы ла мотлаҡ бар.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

ЗАМАНСА...

# ӨЙРӘНЕҮ ЕҢЕЛЕРӘК



**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды Бөтә донъя селтәрендә башҡорт телен ҡулланыуға һәм өйрәнеүгә йүнәлтелгән бер төркөм ҡушымталар һәм башҡа проекттар булдырҙы.**

Мәҫәлән, башҡорт программистары балалар өсөн "Әлләсе", "IQbalaBash" һәм "Inofon BASH" мобиль ҡушымталарын эшләне. Билдәле "Алиас" ("Әлләсе") уйынының башҡортса мобиль версияны барлыҡҡа килде. Уйын барышында карточкала тәҡдим ителгән һүҙҙе икенсе һүҙҙәр менән аңлатырға кәрәк. Уйындың йәш сикләүҙәре юҡ. Уны башҡорт теле дәрестәрендә лә, рәсми булмаған шарттарҙа ваҡыт үткәреү өсөн дә ҡулланырға мөмкин. "Алиас" ижади фекерләүҙе, логиканы, риториканы үҫтерә, башҡорт телен өйрәнеүҙә ярҙам итә.

"Inofon BASH" ҡушымтаһы иң киң таралған 400-ҙән ашыу һүҙҙе өйрәнергә мөмкинлек бирә. Өйрәнелгән бөтә һүҙҙәр ҙә теге йәки был тормош хәлдәрен һүрәтләгән темаларға берләштерелә һәм сюжет иллюстрациялары рәүешендә бирелә. Уйынсылар һүрәттән диктор атаған предметты табырға, һүҙҙең уның яңғырашын һәм яҙылышын иҫтә ҡалдырырға тейеш. Һүҙҙәрҙе иллюстрациялар менән бәйләп биреү кәрәкле һүҙҙе тиҙ иҫтә ҡалдырырға ярҙам итә, тип билдәләне уҡытыусылар.

"IQ Balabash" белем биреү мобиль ҡушымтаһы Ҡаҙағстан программистары менән берлектә булдырылған. Ул балаларға тирә-яҡ донъяны ҡыҙыҡлы уйын ярҙамында өйрәнеүгә булышлыҡ итә. Ҡушымта 14 тематик классификатор буйынса башҡорт телендәге һүҙҙәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтә. Ул һүрәттәр, 3D анимация, логиканы, хәтерҙе һәм моториканы үҫтереү өсөн уйындар менән байытылған.

"IQ Balabash" - башҡорт телендәге тәүге ҡушымта булды. Был бик күп ирекмәндәрҙең, шул иҫәптән материалдарҙы бөтөнләй бушлай тауышландырған "Тамыр" телестудияһының эше ине. 2019 йылға тиклем башҡортса ҡушымталар булманы. Кемгәлер оҡшамаһа ла, хәҙер балалар интернетта йәшәй, уларҙың ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерергә кәрәк, - тип билдәләне Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды етәксеһе Гөлназ Йософова. - Шул ваҡыттан бирле бер нисә ҡушымта булдырҙыҡ һәм артабан да эшләүҙе дауам итәбеҙ. Быйыл Мәскәү ирекмәндәре менән берлектә "Туған тел" программаһын эшләнек, ул башҡорт телен өйрәнеүгә тәғәйенләнгән. Ҡушымтала әлеге ваҡытта 20 дәрес бар һәм ул дауам ителәсәк".

Өлкәндәр өсөн быға тиклем "Сәләм" башҡортса һөйләшеү ҡушымтаһы, "Эшлекле башҡорт теле" кеҫәк мобиль ҡушымталар эшләнгәйне. Программистар әйтеүенсә, "Сәләм" 39 бүлектән тора, уларҙың һәр береһендә өсәр дәрес, бөтәһе 117. Дәрестәр ябайҙан ҡатмарлыға тиклем төҙөлгән, тел ҡыҫҡа күнегеүҙәр ярҙамында өйрәтелә. Шулай уҡ 1500 һүҙҙе һәм һүҙбәйләнеште үҙләштереү мөмкинлеген биргән 800 тест һорауы бар. Һүҙлек көндәлек тормошта иң киң таралған һүҙҙәрҙән тупланған.

"Эшлекле башҡорт теле" - эшлекле аралашыу мәҙәниәтенә өйрәтеүсе, үҙаллы эшләү өсөн күнегеүҙәрҙе һәм "Рәсми-эшлекле лексиканың ҡыҫҡаса русса-башҡортса һүҙлекбелешмәһе"н үҙ эсенә алған интерактив дәреслек. Ҡушымтала иң йыш төҙөлгән эшлекле ҡағыҙҙар өлгөләре бирелгән.

Был ҡушымталарҙың барыһын да Android-ҡа һәм iOS-ҡа күсерергә мөмкин.

Бынан алда Башҡортостан Башлыҡы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә балаларға башҡорт телен еңел һәм күңелле өйрәнеү өсөн булдырылған "Әлифба" анимацион сериалының сығыуы хаҡында һөйләгәйне. "Балалар өсөн башҡорт телен уҡытыу шулай булырға тейеш - мөмкин тиклем ҡыҙыҡлы һәм ябай", - тип тәҡдим итте ул.

**Элина ӘХМӘТОВА әҙерләне.**

БАҠСА

# РАУЗА СӘСКӘҺЕ ҮҪТЕРӘҺЕҢМЕ?

**Сәскә үҫтерергә яратҡан баҡсасыларҙың беҙҙең ярайһы уҡ ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында раузаны ла шау сәскәгә күмелдереп үҫтергәнен беләбеҙ. Ә бына был эшкә тотона алмай торған уңғанбикәләргә ошо йәһәттән бер нисә файҙалы кәңәш еткермәксебеҙ.**



Себер һәм Уралда ашланған *(привитый)* раузаларға өҫтөнлөк бирергә кәрәк, сөнки улар ауырыуҙарға һәм һыуыҡтарға ҡаршы ныҡ тора. Ул сыҙамлы үҫемлек. Бынан тыш, ашланған раузаларҙың үрсетмәләре тиҙерәк тамырланып китә.

Ялғанған үҫентене дөрөҫ ултыртҡанда, ул 15-30 көн эсендә тамырлана һәм ботаҡтарға нығыҡ бирә, ә тамырландырып ултыртҡан рауза үҫентеһе яҡынса 3-5 йылдан һуң ғына нығынып үҫеп китә ала.

Ҡырыҫ шарттарҙа үҫтереү өсөн сәскәләрҙең сорттарына ла иғтибар итергә кәрәк. Раузаның парк һәм флорибунда төрҙәре тәрбиәләүҙә лә артыҡ көс талап итмәй, һыуыҡҡа ла тиҙ бирешеп бармай. Ә бына сәй-гибрид төрҙәре ауыр ҡышлай, ҡышҡыһын уларҙы баҙ аҫтында тотоу хәйерле. Үрмәле раузалар яҡшылап ҡапланған осраҡта ҡышлай ала, әммә уларҙы тәрбиәләү ҙур тәжрибә талап итә.

***Раузаны ҡайҙа ултыртырға?*** Һыуыҡ тәбиғәт шарттарында сәскәләр өшөп, юҡҡа сыҡмаһын өсөн ҡояш күп һәм оҙайлы төшкән урын булырға тейеш. Раузаны саф һауа әйләнеше насар һәм ҡояш йылытмаған нигеҙ, текмә буйҙарына, шулай уҡ ер аҫты һыуҙарының тәрәнлеге 1 метрҙан кәм булған урынға ултыртырға ярамай. Һыуыҡ елдәрҙә ышыҡ урынды һайлау ҙа мөһим. Шулай уҡ башҡа дөйөм кәңәштәрҙә лә күҙ уңынан ысҡындырмау кәрәк.

***Нисек һәм ҡасан ултыртырға?*** Раузаларҙы асыҡ тупраҡҡа ултыртҡанда ашланған урынды 5-7 см-ға тәрәнәйтеү кәрәк, әммә ҡайһы бер сорттар ҡышҡы һыуыҡтарҙы ауыр күтәреү сәбәпле, үҫентеләрҙе махсус пластик һауыттарға ултыртыу кәңәш ителә. Былдай сәскәләрҙе көҙгөһөн тамырҙарына зыян килтермәй генә ҡаҙып алып, ҡышҡыһын һаҡларға индерергә була.

***Раузаны яҙғыһын да, көҙгөләккә ултыртып ҡалдырырға ла мөмкин.*** Яҙ тупраҡ 8-10 градус йылынғас уҡ ултыртырға мөмкин: апрель аҙағы - май башында. Раузаны ултыртырҙан алда тамырҙарын ураған ҡапты иплән кенә алып ташларға, ботаҡтарын парафин һәм балауыҙҙан таҙартырға, тамырының зәғифләнгән урындарын ҡырҡып ташлап, һыуға тығып торорға. Шулай уҡ тамыр йәйҙерткес матдә һалынған һыуҙа бер нисә сәғәт тотоу ҡамасауламаҫ. Тышҡа сығарып ултыртыр ваҡыттан алдараҡ һатып алынған рауза үҫентеләрен һалҡын баҙ аҫтында, йәки һыуыткыстың йөшелсәләргә тәғәйенләнгән бүлегендә һаҡлап торорға була.

Көҙгөһөн ултыртып ҡалдырырға теләһәгеҙ, һыуыҡ төшөрҙән алда әҙерләнергә кәрәк. Ҡыш еткәнсе рауза нығынырға тейеш. Шулай ҙа ашыҡмағыҙ, үҫенте "көҙгөләккә әҙерләнеп", һулыбыраҡ барған булырға һәм көндөҙ һауа температураһы 4 градус тирәһе торорға тейеш. Шунан да һыуығыраҡ булһа, раузаларҙы яҙ ултыртыу өсөн һаҡларға һалыу хәйерле.

***Ҡышҡылыҡҡа әҙерләп.*** Ҡышҡыһын ҡар - раузалар өсөн иң шәп "юрған". Шулай ҙа ҡышҡылыҡҡа әҙерләнгәндә рауза ҡыуағына тәүҙә баҡыр купоросы һибергә, шунан ҡыуаҡты яҡшылап ҡырҡып, төбөн 25-30 см бейеклек тирәһе тупраҡ менән күмергә һәм ылыҫлы ағас ботаҡтары менән ҡапларға кәрәк. Бысҡы онтағын ҡулланырға ла була, тиҙәр, әммә онтаҡтың температура кимәле төшөп-менгәндә янып сереүе ихтималлығын хәтерҙә тотоғоҙ. Күмелгән ҡыуаҡты башта ылыҫлы ағас ботаҡтары, аҙаҡ рубероид менән ҡаплап, өҫтөнән пленка менән ябалар. Бындай ҡыуаҡты ҡапламаһы күрт итһә, рауза өшөр тип шикләнмәһәгеҙ ҙә була.

Тағы ла ҡырҡылған рауза ҡыуағына ҡатырға ҡап түңкәреп, өҫтөнән махсус япма менән урап, полиэтилен пленка ябып ҡуйырға мөмкин. Ҡатырға ҡап урынына махсус эшләнгән каркас, дуғалар ҡулланырға ла ярай. Көндәр йылытҡанда былдай нығытмаларҙың бер осон ғына күтәреп елләтеүе уңайлы.

Яҙға сыҡҡас, рауза ҡыуаҡтарының өҫтөнә ятҡан ҡарҙы ул ауыраймаҫ элек уҡ йәйләп таҙарта башларға кәрәк. Ирегән ҡар ҙа полиэтилен япма аҫтына үтеп, артыҡ еүешләтергә һәм бөшмәк ауырыуҙарына сәбәпсе булыуы ихтимал. Төбөнә һалынған бысҡы онтағын, ылыҫлы ағас ботаҡтарын әйләндереп, елләтеү мөһим. Ә бына магазиндан махсус материал ҡулланған булһағыҙ, уға тейеү мотлаҡ түгел, көн йылынғас алып ташларға ярай.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ЙОҠО АЛДЫНАН УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тип өйрәткән: "Урынға ятҡанда:

**Әғүүҙү бикәлимәәтилләәһит-тәәммәти мин ғадабиһи үә ғиҡаабиһи үә шәрри ғибәәдиһи үә мин һәмәзәәтиш-шәйәәтыыни үә ән йәхдуруун", - тип әйт.**

"Уның асыуынан һәм язаһынан, Уның ҡолдарының зыянынан һәм шайтандарҙың ҡотҡоһонан һәм уларҙың миңә яҡынлашыуынан Алланан Уның һүҙҙәрендә яҡлау эҙләйем", - тип әйт. Ошо доғанан һуң һиңә хәүеф янамаҫ һәм бер нәмә лә зыян килтермәҫ" *(Әбү Дауыт."Тыйб", 19-сы хәҙис; Тирмизи. "Дәғүәт", 90-сы хәҙис).*

Имам Бохариҙың әйтеүенсә, Аллаһ Илсеһе Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) былай тип өйрәткән: "Урынға ятыр алдынан намаҙға әҙерләнгәндәге кеүек тәһәрәтлән. Шунан уң яғыңа ят та ошолай тип әйт:

**Аллааһүммә әсләмтү нәфсии иләйкә үә үәджджәһтү үәджһии иләйкә үә фәүуадту әмрии иләйкә үә әлджә'ту ҙаһрии иләйкә рағбәтән үә раһбәтән иләйк. Ләә мәлджә'ә үә ләә мәнджә'ә минкә илләә иләйк. Әмәнту бикитәәбикәл-ләҙии әнзәлтә үә бинәбиййикәл-ләҙии әрсәлт.**

"Эй Аллам! Үҙемде тулыһынса Һиңә тапшырам һәм йөҙөмдө Һиңә табан йүнәлтәм һәм Һинең бойороғона буйһонам һәм Һиндә яҡлау эҙләйем. Минең ынтылышым тик Һиңә генә һәм минең ҡурҡыуым тик Һинең алдыңда ғына, минең ышанысым тик Һиңә генә һәм ҡайтыуым да тик Һиңә генә. Һинең беҙгә биргән Китабыңа һәм Һинең беҙгә ебәргән Бәйғәмбәреңә (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ышанам. Әгәр ҙә ошо төндә һиңә үлем килһә, мосолман булып үләсәкһең. Һәм был һүҙҙәр һинең һуңғы һүҙҙәрең буласаҡ".

Хуҙәйфә разыйаллааһу ғәнһүҙән ишеткән Имам Бохариҙың әйтеүенсә:

**"Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт (саллаллааһу ғәләйһи үә сәлләм) йоҡларға ятыр алдынан былай тигән: Аллааһүммә бисмикә әмүүтү үә әхйәә.**

"Эй Аллам! Һинең исемең менән үләм һәм терелермен" *(Боха- ри. "Тәүхид", 13-сө хәҙис; "Дәғүәт", 6-сы, 7-се, 12-се, 15-се хәҙистәр; Мөслим. "Зекер", 59-сы хәҙис).*

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Ун беренсе хат: "Карьеризм хаҡында"

Кеше донъяға ауаз һалған көндән алып үҫешә. Ул киләсәккә табан ынтыла. Ул, хатта быны үҙе лә аңламайынса, уҡый, үҙенә яңы маҡсаттар ҡуйырға өйрәнә. Һәм тормошта үҙ урынын шул тиклем тиҙ яулай. Инде ҡалаҡ та тота белә, һәм тәүге һүҙҙәрен дә әйтә.

Һуңынан үҫмер һәм йәш егет ҡорона ингәс тә ул уҡый.

Шунан белемдәрен ҡулланыу, ынтылған маҡсаттарына ирешеү мәле етә. Балиғлыҡ. Бөгөнгө менән йәшәргә кәрәк...

Әммә шәп тиҙлек һаҡлана һәм бына күптәр өсөн аҡыл туплауға алмашҡа тормошта үҙ урынын табыу ваҡыты етә. Хәрәкәт инерция буйынса бара. Кеше һәр ваҡыт киләсәккә табан бара, ә киләсәк хаҡ белемдә лә, оҫталыҡ туплауҙа ла түгел, тик үҙең өсөн файҙалы хәлдә нығынып ҡалыуҙа ғына. Йөкмәтке, ысын йөкмәтке юғалтылған. Бөгөнгө көн тыумаған, һаман да киләсәккә табан мәғәнәһеҙ ынтылыш ҡала килә. Ошо инде карьеризм. Кешене бәхетһеҙ һәм тирә-йүндәгеләр өсөн түҙеп торғоһоҙ иткән күңел тынысһыҙлығы.

## Ун икенсе хат: "Кеше зыялы булырға тейеш"

Кеше зыялы (интеллигент) булырға тейеш! Әгәр ҙә уның һөнәре зыялы булыуҙы талап итмәһә? Әгәр ҙә ул белем ала алмаған булһа: шулай килеп сыҡҡан. Әгәр тирәяҡ мөхит мөмкинлек бирмәһә? Әгәр ҙә интеллигентлыҡ уны хеҙмәттәштәре, дуҫтары, туғандары араһында "аҡ ҡарға"ға әйләндерһә һәм башҡалар менән яҡын мөнәсәбәттәр ҡорорға ҡамасаулаһа?

Юҡ, юҡ һәм юҡ! Интеллигентлыҡ ниндәй осраҡта ла кәрәк. Ул кешене уратып алғандар өсөн дә, кешенең үҙенә лә кәрәк.

Был бик, бик мөһим һәм тәү сиратта бәхетле һәм оҙаҡ йәшәр өсөн, эйе, оҙаҡ йәшәр өсөн кәрәк! Сөнки зыялылыҡ әхлаҡи сәләмәтлеккә тиң, ә сәләмәтлек физик яҡтан ғына түгел, аҡыл йәһәтенән дә оҙаҡ йәшәү өсөн кәрәк. Бер иҫке китапта: "Атайыңды һәм әсәйеңде хөрмәт ит һәм ерҙә оҙаҡ йәшәрһең", тиелгән. Был тотош халыҡҡа ла, айырым бер кешегә лә ҡағыла. Был аҡыллы.

Әммә тәүҙә зыялылыҡ нимә икәнен, шунан уның оҙон ғүмерлелек васыятына ни өсөн бәйле булыуын билдәләп китәйек.

Күптәр зыялы кеше - ул күп уҡыған, яҡшы белем алған (гуманитар белемгә өҫтөнлөк бирелә), күп сәйәхәт иткән, бер нисә тел белгән шәхес тип иҫәпләй.

Шул уҡ ваҡытта быларҙың барыһына эйә булып та, зыялы булмауың ихтимал, һәм, киреһенсә - белемең етмәһә лә, күңелең менән зыялы кеше булыуың бар.

Уҡымышлылыҡты зыялылыҡ менән бутарға ярамай. Уҡымышлылыҡ иҫке йөкмәтке менән йәшәй, ә зыялылыҡ - яңыны ижад итеү һәм иҫкене яңы һымаҡ аңлау менән.

Был ғына ла түгел... Ысын зыялы кешене барлыҡ ғилеменән, белемлелегенән, хәтеренән яҙҙырығыҙ. Ул бар донъяһын онотһон, әҙәбиәт классиктарын да белмәһен, бөйөк сәнғәт әҫәрҙәрен дә иҫләмәһен, мөһим тарихи ваҡиғаларҙы онотһон ти, әммә шул уҡ ваҡытта рухи ҡиммәттәргә ҡарата зирәклеген, белем эстәүгә һөйөүен, тарихҡа ҡыҙыҡһыныуын, гүзәллекте тойоу һәләтен, ысын сәнғәт әҫәрен аптыратыу өсөн генә эшләнгән тупаҫ әйберҙән айыра алһа, тәбиғәттең хозурлығына хайран ҡала алһа, башҡаларҙың холҡон һәм шәхесен аңлаһа, уларҙың хәленә керә һәм ярҙам итә алһа, тупаҫлыҡ, ғәмһеҙлек, үсәү, көнләшеү тоймаһа, ә башҡа берәүҙе лайыҡлы баһалаһа, үткәндәрҙең мәҙәниәтенә хөрмәт, тәрбиәле кеше оҫталыҕын, әхлаҡи мәсьәләләрҙә хәл иткәндә яуаплылыҡ, тел байлығы һәм дөрөҫләгө (һөйләү һәм яҙыу) күрһәтһә - бына шул зыялы кеше була ла инде.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## БСТ
## 23 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК

7.00 Сәләм.
10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на рус.Яз.)/. [12+]
12.15 Письма солдатам. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башҡорттар. [6+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
16.45 Х/ф "Советник". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Квадратные метры. [12+]
18.50 Хоккей. Металлург (Магнитогорск) - Салават Юлаев (Уфа). КХЛ.
22.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Саит Ярми "Сәсән". [12+]
2.15 Спектакль "И судьба - не судьба". [12+]
4.30 Автограф. [12+]

## 24 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК

7.00 Сәләм.
10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Городок АЮЯ. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00, 4.30 Уфимские умы. [12+]
17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00 Телецентр. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 ГКБ №18 г.Уфы - 65 лет с заботой о здоровье. [12+]
20.30 Д/ф "Обыкновенный гений". Виль Тимербулатов". [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
2.15 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]
4.15 Письма солдатам. [12+]

## 25 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00, 5.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15, 13.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Физ-ра. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
16.45 Специальный репортаж. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Квадратные метры. [12+]
18.50 Хоккей. Трактор (Челябинск) - Салават Юлаев (Уфа). КХЛ.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
2.30 Спектакль "Караул, тёщу украли!" [12+]
4.00 Телецентр. [12+]

## 26 СЕНТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.15 Специальный репортаж. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар-2024. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Дознание. [16+]
16.15 Патриот РФ. [12+]
16.45 Башкирские каникулы. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
19.00 Телецентр. [12+]
19.45 Мама. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
21.00 Простые истории: жить, работать, любить.
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
2.30 Спектакль "Дальше - тишина". [12+]

## 27 СЕНТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА

7.00 Сәләм.
10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00, 18.00 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00, 13.45, 17.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.15 Ҡурай даны. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [6+]
16.45, 19.45 История одного села. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
19.00 Честно говоря. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15, 22.15, 4.15 Письма солдатам. [12+]
20.30 Ете егет. [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
23.00 "Башҡорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]
2.15 Спектакль "Земляки". [12+]
4.30 Защитники Отечества. [12+]
5.00 Хазина. [12+]

## 28 СЕНТЯБРЯ
## СУББОТА

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Защитники Отечества. [12+]
8.15 Ете егет. [12+]
9.00 Аль-Фатиха. [6+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Әкиәтсе. [6+]
10.45 Гора новостей. [6+]
11.00 Ат уйнатып. [12+]
11.45 Елкән. [6+]
12.15 Преград.Net. [6+]
12.30 Квадратные метры. [12+]
12.45, 19.00 Письма солдатам. [12+]
13.00 Песни и пьесы Роберта Газизова. [12+]
13.30, 4.45 Башҡорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Д/ф "На юг, к Земле Франца Иосифа. Валериан Альбанов". [12+]
18.00 Уфимские умы. [12+]
19.15, 5.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 "Байыҡ-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
23.15 Ҡурай-шоу. [12+]
23.45 Караоке по-башкирски. [12+]
0.15 Концерт Ишмурата Ильбакова. [12+]
2.30 Спектакль "Любишь, не любишь?" [12+]

## 29 СЕНТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Йома. [6+]
8.15 Тормош. [12+]
8.45 Ҡурай даны. [12+]
9.00 Орнамент. [12+]
9.15 Мама. [12+]
9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Гора новостей. [6+]
11.00 Ат уйнатып. [12+]
11.45 Городок АЮЯ. [6+]
12.00 Сулпылар-2024. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дорога к храму. [6+]
14.30 Честно говоря. [12+]
15.15 Уфа и уфимцы. [12+]
15.45 Спектакль "Горка". [12+]
17.15 Концерт Алины Давлетхановой. [12+]
18.45 Вестник Газпромтрансгаз Уфа. [12+]
19.00 Әлләсе... [6+]
19.45 Патриот РФ. [12+]
20.00 Автограф. [12+]
20.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Концерт Марьям Султановой "В моих песнях душа народа..". [12+]
1.30 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]
4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Сентябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Акшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (20) дүшәмбе | 5:15 | 7:05 | 13:30 | 17:11 | 19:09 | 21:00 |
| 24 (21) шишәмбе | 5:18 | 7:07 | 13:30 | 17:09 | 19:07 | 20:57 |
| 25 (22) шаршамбы | 5:20 | 7:09 | 13:30 | 17:06 | 19:04 | 20:54 |
| 26 (23) кесе йома | 5:22 | 7:11 | 13:30 | 17:04 | 19:02 | 20:51 |
| 27 (24) йома | 5:25 | 7:13 | 13:30 | 17:02 | 18:59 | 20:48 |
| 28 (25) шәмбе | 5:27 | 7:15 | 13:30 | 17:00 | 18:57 | 20:45 |
| 29 (26) йәкшәмбе | 5:29 | 7:16 | 13:30 | 16:58 | 18:54 | 20:42 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*



Реклама.

*КӨНҮҘӘК*

## Бурыстарҙан тиҙ һәм законлы рәүештә ҡотолорға ярҙам итәбеҙ!

Хәҙерге заманда һәр кемебеҙ финанс ҡыйынлыҡтары кисерергә мөмкин. Торлаҡ-коммуналь хужалығы хеҙмәттәре өсөн бурыстар, микрозаймдар, кредиттар - былар барыһы ла мәшәҡәттәр тыуҙырырға һәм даими стресс сығанағына әүерелергә мөмкин. Әммә барлыҡ бурыстарҙан ҡотолоуҙың законлы һәм тиҙ ысулы бар, тип әйтһәк, нисек?

Беҙ, **"Время свободы"**, - банкротлыҡ һәм бурыстарҙан ҡотолоу мәсьәләләрендә махсуслашҡан профессионалдар командаһы. Беҙҙең маҡсат - һеҙгә барлыҡ законлы алымдарҙы ҡулланып, финанс азатлығы яуларға һәм бурыстарҙан ҡотолорға ярҙам итеү.

Ни өсөн банкротлыҡ - ул хәл ителеш?

Банкротлыҡ - ул һуңғы сик түгел, ә яңы башланғыс. Был көс етмәҫлек бурыстарҙан ҡотолоу һәм тормошондо яңынан башлауҙың законлы юлы. Ләкин банкротлыҡ процесы ҡатмарлы һәм ҡурҡыныс булып тойолоуы ихтимал. Күп кешеләр милкен юғалтыуҙан ҡурҡа, яманаты сығыуҙан шикләнә һәм эште ниҙән башларға белмәй. Нәҡ ошо осраҡта тәжрибәле юристар ярҙамға килә.

ВРЕМЯ СВОБОДЫ

### Эш нисек ҡоролған?

✓ **Беренсел консультация:** бөтә һорауҙарға яуап бирәсәкбеҙ, һеҙҙең осраҡты анализлап, иң ҡулай ҡарар тәҡдим итәбеҙ;

✓ **Документтарҙы әҙерләү:** барлыҡ кәрәкле документтарҙы тупларға һәм рәсмиләштерергә ярҙам итәбеҙ;

✓ **Банкротлыҡ процесы:** банкротлыҡ процесының барлыҡ хоҡуҡи аспекттарын үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ;

✓ **Бурыстарҙан ҡотолоу:** процесс тамамланғас, һеҙ барлыҡ бурыстарҙан ҡотолоуығыҙ тураһында рәсми раҫлама алаһығыҙ.

### Эш нимәгә нигеҙләнгән?

- Индивидуаль ҡараш, һәр ситуацияның үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, ҡулайлы эш планы.
- Оператив эш, банкротлыҡ буйынса тамамланған хеҙмәт гарантиялана.
- Законлылыҡ. Барлыҡ эштәр РФ ҡануниәтенә тап килә.
- Һәр этапта ярҙам итеү. Процестың һәр этабында - консультациянан алып бурыстарҙан тотош ҡотолдорғанға тиклем оҙатып йөрөү.

**Финанс проблемаларын хәл итеүҙе аҙаҡҡа ҡалдырмағыҙ!**

**"Время свободы"** командаһы менән бөгөн үк бәйләнешкә инегеҙ
һәм финанс азатлығына беренсе аҙым яһағыҙ.
**Беҙҙең адрес:** Өфө ҡалаһы, Әй урамы, 69/2А, 4-се ҡат.
**8-905-352-9555** телефон һандарына шылтыратығыҙ,
йәки сайтыбыҙҙа времясвободы.рф заявка ҡалдырығыҙ.
**Азатлыҡ мәле - ул бурыстарһыҙ яңы тормош мәле!**

Реклама рәүешендә.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА ТЫНЫСЛЫҠ КӨНӨ

**Был байрам йыл да 21 сентябрь көнө билдәләнә. Уны 1981 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы булдырған.**



"Һуғыштың яуызлығы һәм тыныслыҡтың өҫтөнлөгө кешеләргә шул ҡәҙәре билдәле, хатта шул осорҙан, кешеләрҙе беҙ белгәндән алып, "Тыныслыҡ һеҙгә" тип сәләмләү иң яҡшы теләк булған", - тигән Лев Толстой. Бөгөн был теләк-һүҙҙәр Ер шарындағы һәр кем өсөн иң изгеһе, иң ҡәҙерлеһе. Шуға илдәр һәм дәүләттәр араһында татыулыҡ, хеҙмәттәшлекте арттырыу, донъялағы барған мәхшәрҙәрҙе күмәк көс, теләктәшлек ярҙамында еңеү маҡсатына ярашлы ошо байрам ойошторолған да инде.

Халыҡ-ара тыныслыҡ көнөнөң символы - суҡышы менән зәйтүн һабағы күтәргән күгәрсен һүрәте. Уны билдәле испан рәссамы Пабло Пикассо төшөргән.

Илебеҙҙә иң боронғо ойошмаларҙың береһе - Рәсәй тыныслыҡ фонды эшләп килә. Уның бүлексәләре Рәсәйҙең 47 төбәгендә бар.

Халыҡ-ара тыныслыҡ көнө менән бырығыҙҙы ла, илдәребеҙ имен булһын!




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**36-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Бүрек. Етегән. Көләпәрә. Август. Ҡәмәр. Атом. Яманат. Окоп. Аллигатор. Өйөр. Оя. Игәт. Сәкмән. Ыштан. Елән. Әләм. Ра. Сапан. Аҙым. Аҙна.

**Вертикаль буйынса:** Ҡолаҡсын. Камзул. Ут. Ринг. Инә. Елкә. Лампас. План. Үгеҙ. Темәс. Оро. Алма. Әрмәк. Әҙәм. Күнәк. Аҙан. Алъяпҡыс. Тун. Өлкәр. Уран. Таҫтар. Нур.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**25 сентябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**26 сентябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+

**28 сентябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 6+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 сентябрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 11.00 6+

**26 сентябрь "Аҡһаҡ"** (М. Ғиләжев), драма. 12+

**27 сентябрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

**29 сентябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажаралар. 12.00 +

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**26 сентябрь "Йәшә"**, эстрада концерты. 6+

**Халыҡ-ара орган фестивале.** Жан-Кристоф Гейзер, (Швейцария). 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

*Сибай концерт-театр берләшмәһендә:*

**24 сентябрь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А.С. Пушкин), әкиәт. 10.00 0+

**"Ярлыҡау"** (М. Кәрим), баллада. 12+

**25 сентябрь "Математика судьбы, или 1+1=3"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 10.00 12+

**"Ярлыҡау"** (М. Кәрим), баллада. 15.00 12+

*А. Мөбәрәков исемендәге Сибай БДТ сәхнәһендә:*

**26 сентябрь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А.С. Пушкин), әкиәт. 10.00 0+

**"Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (С. Латипов), музыкаль комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 сентябрь "В песнях останемся мы"**, концерт. 6+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**23-24 сентябрь Премьера! "Доктор"** (М. Икрамова), лирик комедия. 12+

**25 сентябрь "Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сисәнбаев), комедия. 12+

*Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында гастролдәрҙә:*

**26 сентябрь "Как избежать зла?"** (Д. Сидерос), мәктәп драмаһы. 12.30 12+

**"Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сисәнбаев), комедия. 12+

## БР Милли музейы

**28 сентябрь** Ғаиләләр өсөн күҙәтеү экскурсияһы. 15.00 0+

**"Берҙәм ғаиләлә"**, сара. 16.00 0+

**29 сентябрь "Искусница-кружевница"**, оҫталыҡ дәресе. 15.00 12+

**ЮРИДИК ХЕҘМӘТТӘР**
**тел. 8-927-95-00-222**
Реклама.

✓ *Кино индустрияһы системаһын был өлкәлә кадрҙар әҙерләмәйенсә үҫтереү мөмкин түгел. Ошо маҡсатты күҙ уңында тотоп, "Кино һәм телевидение" курсын асыу планлаштырыла.*



АФАРИН!

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ КИНОЛАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә республиканың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, төбәктә анимация кластеры булдырыла, тип хәбәр итте. Уның етештереү базаһы донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында урынлашасаҡ.**



Кластерға рәссам-аниматорҙар әҙерләүсе Өфө сәнғәт училищеһы, "Муха" студияһы һәм Әмир Абдраҙаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы инә. Производство базаһы 2024 йылдың октябрендә эшләй башлай. Уның ярҙамында студенттар практик белем алыу, оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашыу, артабан эшкә урынлашыу менән күләмле проекттарҙа ҡатнашыу мөмкинлектәренә эйә буласаҡ.

Әминә Шафиҡова билдәләүенсә, Өфөлә, Стәрлетамаҡта һәм Сибайҙа эшләгән креатив индустрия мәктәптәренең өс анимация студияһы ла кластер системаһына индерелә. "Кванториумдар" һәм өҫтәмә белем биреү учреждениелары нигеҙендә мультстудиялар эшләгән муниципалитеттар менән дә хеҙмәттәшлек итергә әҙербеҙ, - тине республиканың мәҙәниәт министры. - Беҙҙең кластер "Анимация" буйынса һөнәри йүнәлеш платформаһы буласаҡ һәм киләсәктә анимация үҫешенең иң ҙур Евразия үҙәгенә әүерелеүе ихтимал".

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: 2023 йылда "Башҡортостан" киностудияһы һәм "Муха" студияһының "Төньяҡ амурҙары" исемле беренсе тулы метражлы анимация фильмы киң Рәсәй прокатына сыҡты. 2024 йылдың майында Мәскәүҙә III Халыҡ-ара "дөрөҫ" кино фестивалендә картина "Иң яҡшы анимация фильмы" номинацияһында еңеү яуланы. Әле йәнһүрәттең дауамы өҫтөндә эш дауам итә, был юлы ул Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың батырлығына арнала.

Республиканың мәҙәниәт министры, Башҡортостандың киноиндустрияһы төбәктең ысын брендына әүерелде һәм Рәсәйҙә ҙур популярлыҡ яуланы, тип һыҙыҡ өҫтөнә алды. Республика етәксеһе Радий Хәбировтың кинематографистар менән осрашыуҙары һөҙөмтәләре буларак, һуңғы йылдарҙа бик күп киҫкен мәсьәләләр хәл ителде. Атап әйткәндә, "Башҡортостан" киностудияһы яңы ҡорамалдарға эйә булды, ә күп проекттар финанс ярҙамы алыуға иреште. Был саралар шул иҫәптән 2023 йылдан алып конкурс йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Башлығы гранттары иҫәбенә тормошҡа ашырыла.

Гранттар ярҙамында режиссер Булат Йосоповтың "Фәрзәнә көнбайышҡа бара" күләмле тарихи фильмы, Гәүһәр Батталованың "Көс урыны. "Турахан" визит-үҙәге" фәнни-популяр фильмы, "Муха" студияһының "Әлифба" мультпроекты, Айнур Асҡаровтың "Өфө, мин һине яратам!" киноальманахы һәм Анна Макееваның "Ике ағай" ҡыҫҡа метражлы фильмдары төшөрөлә.

Бер нисә проект Ватанды һаҡлау, Махсус хәрби операцияла яугирҙарыбыҙҙың батырлығы һәм ҡаһарманлығы темаһына арналған. Улар иҫәбендә - Радик Килмәмәтовтың Сибай концерт-театр берекмәһенең мобилизацияланған артистары яҙмышы тураһындағы "Герой бейеүе" документаль фильмы, Руслан Юлтаевтың алғы һыҙыҡтағы ир-егеттәргә оҙатылған башҡорт аш-һыуы хаҡындағы "Ҡунаҡхана" ҡыҫҡа метражлы фильмы, Махсус хәрби операцияла һәләк булған сая яугир Фәнис Хөсәйенов тураһындағы "Безбашеный" патриотик анимация фильмы.

Кино индустрияһы системаһын был өлкәлә кадрҙар әҙерләмәйенсә үҫтереү мөмкин түгел. Ошо маҡсатты күҙ уңында тотоп, яҡын киләсәктә Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында "Кино һәм телевидение" курсын асыу планлаштырыла.

Әминә Шафиҡова билдәләүенсә, кино индустрияһы кинопрокат менән дә айырылғыһыҙ бәйле. Мәҫәлән, Башҡортостанда 161 кинозал эшләй, шуларҙың 49-ы - муниципаль кимәлдә. 2019 йылдан республикала "Мәҙәниәт" милли проекты сиктәрендә дөйөм алғанда 211 миллион һумға 38 кинозал яңыртылды. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан Рәсәй төбәктәре араһында беренсе бара. 2024 йылдың аҙағына тиклем Асҡын, Баҡалы, Йәрмәкәй, Миәкә һәм Нуриман райондарында йәнә биш муниципаль кинозал асыу планлаштырыла.

Башҡортостан Башлығы Рәсәйҙә милли кино өлкәһендә ике уңышлы феномен - яҡут һәм башҡорт кинематографының - барлыҡҡа килеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Республикала киноиндустрияны артабан үҫтереү маҡсатында, Радий Хәбиров Саха (Яҡут) республикаһының тәжрибәһен өйрәнергә тәҡдим итте.

ТЕЛҺӨЙӘР

## МӨРӘҮӘТЛЕ БУЛ!

**Беҙҙең үҙенсәлекле лөғәтебеҙҙә һирәгерәк ҡулланыу арҡаһында онотола барған һүҙҙәр урын ала. Ә беҙ уларҙы онотормау яҡлы. Шуға ла иҫкә төшөрөп торабыҙ, хәтергә һеңдерәбеҙ.**

**Монтар.** Аҡмай торған һыуҙа барлыҡҡа килгән бысраҡ "монтар" тип атала. *Монтарҙа балыҡ үрсемәҫ. Аҡҡан һыуҙа монтар юҡ, ташҡын кисмәҫ толпар юҡ.*

**Монтоҡ, монтоҡлау.** Ҡайһы бер һөйләштә "мөнтәлеп бөткән нәмә, мөнтәү" тигәнде белдергән һүҙҙәр. *Монтоҡ кейем. Монтоҡланған әйбер.*

**Мөнйөмә.** Мәғәнәһе - "юҡ-барҙан ғәйеп табып, өҙлөкһөҙ һөйләнеп, әрләп йөрөүсән". *Мөнйөмә кеше. Беҙ мөнйөмә түгел.*

**Мөрәҙ.** "Мөрәҙ"ҙең ҡырмыҫҡа майы икәнен беләйек. *Мөрәҙ файҙаһы. Халыҡта электән мөрәҙҙе дауаға ҡулланғандар.*

**Мөрәүәт. 1.** "Мөрәүәт" "егетлек" тигән һүҙ урынында йөрөй. *Көсһеҙҙә ҡурсыу - мөрәүәт ул. Тормошта мөрәүәткә сәбәп сығып тора.* **2.** Йомарт күңелллелек, кешелеклек хаҡында һөйләгәндә лә, "мөрәүәт" һүҙе тура килә. *Мөрәүәт күрһәтеү. Хайуандарға ҡарата ла мөрәүәт белдереү кәрәк.* **3.** Ә "мөрәүәтле", тимәк, - "яҡшылыҡ эшләй торған, кешелекле"; "күңелгә яҡын, ғәзиз, изге". *Мөрәүәтле зат. Мөрәүәтле башҡорт теле. Мөрәүәтле тыуған яҡ.*

**Шулай итеп, мөрәҙ - тәнде, мөрәүәт йәнде имләр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## АТ АЛҺАҢ...
### ауылың менән кәңәш ит

Ағай-эне аты уҙғансы, күршеңдең тайы уҙһын.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер ауылда бер ғашиҡ егет йәшәгән. Ул ғашиҡ булған ҡыҙға тирә-яҡта матурлыҡ буйынса тиңләшеүсе булмаған һәм ул да ошо уҡ ауылда йәшәгән. Ауылдағы бар егеттәр ошо ҡыҙға ғына ғишыҡ тотҡан. Ләкин ҡыҙ үҙенең матурлығы менән артыҡ ныҡ маһайған һәм ғорурланған, шуға ла ауылдағы бер егетте лә күҙенә лә элмәгән, яҡынлатмаған да. Сараһыҙлыҡтан ни эшләргә белмәгәс, баяғы ғашиҡ егет көслө һәм ҡыйыу яугир булырға ҡарар итә. Күкрәге тулы орден-миҙалдар таҡҡан хәрби кейемдәге яугирҙы был ҡыҙ, моғайын, үҙ итер, уға кейәүгә сығыр, тип уйлай ул һәм ҡалаға һалдат хеҙмәтенә китә. Ул күп кенә һуғыштарҙа ҡатнаша, офицер дәрәжәһе ала һәм ауылына герой булып әйләнеп ҡайта. Ләкин әле һаман үҙенең йәрен һайламаған ҡыҙ егет яғына боролоп та ҡарамай.**

**Былай ҙа ҡыҙҙың иғтибарын йәлеп итә алмағас, егет инде хәҙер бай кеше булырға ҡарар итә. Ҡыҙ уның ҡиммәтле бүләктәре алдында иреп төшәсәк, тип уйлай ул. Ул бер бай кешегә тән һаҡсыһы булып эшкә урынлаша, унан бик күп нәмәләргә өйрәнә. Оҙаҡламай үҙ эшен асып, байып китә. Һәм бына ғашиҡ егет бай кеше булып, үҙенең тыуған ауылына ҡайтып төшә. Ләкин ҡыҙ уның бүләктәрен һалҡын ғына ҡабул итә, башҡа егеттәр килтергән бүләктәрҙе сығарып күрһәтә, бүләк ташыусылар һинән башҡа ла етерлек, йәнәһе.**

**Шунан инде егет аҡыл эйәһе булырға ҡарар итә. Ғаиләһенә барлыҡ байлығын ҡалдыра ла, донъя буйлап аҡыл йыйырға сығып китә. Бер нисә йылдан ауылына аҡыл эйәһе булып ҡайтып төшә. Ләкин был юлы инде ул баяғы ҡыҙҙың янына бармай, ә аҡылы менән бүлешеп, үҙ өйөндә тыныс ҡына ғүмер итә башлай.**

**Ваҡыт үтә. Хәҙер инде матурлығынан яҙа башлаған ҡарт ҡыҙ һаман, миңә тиң ир юҡ, тип, яңғыҙы йәшәй бирә. Ләкин ул көҙгөгә ҡараған һайын үҙенең ҡартая барғанын тоя. Хәҙер инде уны берәү ҙә кәләш итеп алырға теләк белдермәй. Уның сикһеҙ тәкәбберлеге бар егеттәрҙе ҡурҡытып бөткән була. Яңғыҙы ҡалыуҙан ҡурҡыу тойғоһо ҡарт ҡыҙҙы аҡыл эйәһенә алып килә һәм ул унан "Һин мине кәләш итеп алыр инеңме?" тип һорай. Аҡыл эйәһе ризалаша. Ауылдаштары был хәлгә бик аптырай. "Ниңә өйләнәһең уға, ул бит хәҙер убырлы ҡарсыҡҡа әйләнде һәм һиңә бик күп яуызлыҡтар ҡылды", тип белдерә ҡайһы берәүҙәре. Аҡыл эйәһе йылмая һәм шулай ти: "Ә мин уның тарафынан эшләнгән изгелекте генә беләм. Ул булмаһа, мин бер кем дә булмаҫ инем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1621